✓ *Кешенең бәхете һәм бәхетһеҙлеге ул эйә булған ҡиммәтле әйберҙәр һәм алтындар һанынан ғибәрәт түгел. Шатлығы ла, ғазабы ла уның күңелендә. Аҡыл эйәһе теләһә ҡайһы илдә лә үҙен үҙ өйөндәгеләй хис итә. Киң күңелле кеше өсөн Бөтә ғаләм - уның йорто.*

*(Демокрит).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

18 - 24 СЕНТЯБРЬ (ҺАРЫСАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru 2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы ирекле №38 (404)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Йәшәү сығанағыбыҙ - тәбиғәтебеҙҙә,**

ти Президентыбыҙға мөрәжәғәт итеүсе ғалимдар



2

**Таҙартҡан урында түгел...**

сүпләмәгән урында таҙа



4-5

**Кемдәр улар Бикмәтовтар?**

Наполеонға ҡаршы бер полк ғәскәр ҡуйған Бикмәтовтар улар!



8-9

**Ижад гәли йәнәптәре...**

бөтөн булмышынды уға бағышлауҙы ярата



11

14 ТВ-программа

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Башҡортостанмы, әллә Башкириямы? Ғөмумән, республикабыҙ атамаһының нисек әйтелеүе һеҙҙең өсөн мөһимме?

*Рәйлә ВАХИТОВА, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте баш консультанты:*

Был һорауға әленән-әле әйләнеп ҡайтырға тура килә шул. Минең өсөн республикабыҙҙың Башҡортостан тип аталыуы үтә лә мөһим. Беренсенән, "Башҡортостан" һүҙе "Башкирия"ға ҡарағанда ҙурыраҡ йөкмәткеле, уның статусы юғарыраҡ. Икенсенән, рус булмаған халыҡтар йәшәгән республикаларҙы Киргизия, Татария, Башкирия, Калмыкия тип атаған замандар совет осоронда уҡ тороп ҡалды бит инде. Конституциябыҙға ярашлы, Башҡортостан һүҙе һәр телдә үҙгәрешһеҙ әйтелеүе мотлаҡ, һәм ул закон талабы.

*Иҙрис ВӘЛИЕВ, юрист:*

"Башҡортостан" һүҙенең барлыҡҡа килеүе халҡыбыҙ, илебеҙ тарихы менән бермәбер бәйле. Һәр бер һүҙҙең төбөнә ошо һүҙ генә белдерә алған оло мәғәнә һалына. Миненсә, халыҡ-ара ҡулланылышта һүҙҙең тәү яңғырашы нисек алынһа, шул һаҡланырға тейеш. "Башҡортостан" атамаһы "Башкирия"ға ҡарағанда киңерәк, мөһабәтерәк, иркенерәк, Уралтауыбыҙ һымаҡ ғорурыраҡ яңғырай. Әлбиттә, урыҫтар менән аралаша башлағас, улар беҙҙе үҙҙәренең теленә уңайлы итеп "башкирцы" тип атаған. Әммә беҙ Башҡортостанды булдырыусы, йәшәтеүсе милләт булараҡ һәм үҙ республикабыҙ һәм Рәсәй Федерацияһы Конституцияһына ярашлы, илебеҙ атамаһын, законда нисек ҡабул ителгән булһа, шул рәүешле ҡулланыуҙы талап итергә хаҡлыбыҙ. Был талап дәүләт чиновниктарына ла, журналистарға ла, айырым граждандарға ла берҙәй үк ҡағыла. Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәй Федерацияһы Конституцияларында "Башкирия" тигән һүҙ бөтөнләй юҡ. Тимәк, кем дә кем үҙ телмәрендә был һүҙҙе ҡуллана, ул законды боҙоусы, ә законды боҙоусыны судҡа бирәләр.

*Зөлфиә ХАННАНОВА, шағирә:*

Бик мөһим. "Башҡортостан"ды "Башкирия" тип әйтеү Гөлнараны - "Гуля", Ғәлиәне "Галя" тип атаған һымаҡ бит инде. Мин, мәҫәлән, үҙемә "Зуля" йә "Зоя" тип өндәшкәндәрен теләмәҫ инем. "Башҡортостан" һүҙендә рух та, ҡеүәт тә, йөкмәтке лә күберәк, һәлмәгерәк. Революцияға тиклем рус интеллигенцияһы лөғәтендә Башкирия, Башкирский край атамалары булған булыуға, әммә ул ваҡыттағы тел нормаларын кире ҡайтарыр булһаҡ, самодержавие, Рәсәй батшалығы, батша, опричник атамаларын да тергеҙергә тейеш булып сығабыҙ түгелме һуң? Башҡортостанды Башкирия тип атау ҙа ошоға тиң. Беҙ айырым шәхестәрҙең үҙ-ара аралашыуындағы "Башкирия" һүҙе ҡулланылышын тыя ла, был хәлде контролдә лә тота алмайбыҙ. Шулай ҙа рәсми сығыштарҙа, киң матбуғат саралары лөғәтендә, йәмәғәтселек йыйылған урындарҙағы сығыштарҙа закондың үтәлешен талап итергә хаҡлыбыҙ.

*Әмир САЛАУАТОВ, хеҙмәткәр:*

Бындай хилафлыҡ осраҡлы күренеш түгел, ул махсус рәүештә юрый эшләнәләр. Бының менән билдәле көстәр беҙҙең республиканы, милләтебеҙҙе, улай ғына ла түгел, Рәсәй Федерацияһы составындағы башҡа аҙ һанлы халыҡтарҙың да хоҡуҡтарын инҡар итергә теләй. Әйткәндәй, республика башлыҡтарының "президент" тип аталыуына дәғүәне лә шул уҡ көстәр белдерҙе.

Һәр хәлдә, Башҡортостаныбыҙҙы "Башкирия" тип әйтеүҙәренә ризаһыҙлығыбыҙҙы белдерергә бурыслыбыҙ. Исем-атамалар артында оло мәғәнә, киң йөкмәтке, меңәр йылдарға һуҙылған шанлы тарих ята, тимәк, беҙ исем-атамаларҙы һаҡлап-яҡлап, үҙебеҙҙе лә һаҡлайбыҙ һәм яҡлайбыҙ.

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

*ИҒТИБАР!*




## МӨХТӘРӘМ МИЛЛӘТТӘШТӘРЕБЕҘ!

**Бына тағы һине лә, баҫмабыҙҙы ла, ошо баҫманы ижад итеүселәрҙе лә һынау мәле етте. Гәзитебеҙҙе уҡыусы милләттәш туған телдәге баҫманы ниндәй дәрәжәлә һанлай һәм баһалай? Уның үҙ милләтенә, туған теленә ҡарата аң, рух, ихтирамы ниндәй кимәлдә? Баҫмабыҙҙағы һүҙ ҡеүәһе, фекер үткерлеге уның күңелен арбай, сәмен һәм ғәмен уята алырлыҡмы?**

Шулай итеп, үҙебеҙҙең алға ошо һорауҙарҙы ҡуябыҙ һәм 2011 йылдың беренсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылырға саҡырабыҙ һеҙҙе. Һәр ваҡыттағыса, уҡыусыны ылыҡтырыр вәғәҙәләребеҙ ҙә бар: күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы еңер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тыныслығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма аласаҡһығыҙ ҡулдарығыҙға.

**Бынан тыш**, әлбиттә, оптимистар өсөн **бүләктәр ҙә** булмай ҡалмаясаҡ. Оптимистар өсөн, тибеҙ, сөнки гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларҙың "Мин барыбер бүләкһеҙ ҡалмайым!" тигән кешеләрҙән генә килеүен яҡшы беләбеҙ. "Киске Өфө"нө уҡыусыларҙың барыһының да оптимист булыуын теләйбеҙ, уларҙың ошондай сифаттарын уятыуҙы маҡсат итеп ҡуябыҙ.

**Әйткәндәй**, кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Шулай итеп, 2011 йылдың тәүге ярты йыллығына 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 330 һум 24 тингә яҙыла алаһығыҙ, ә предприятие һәм ойошмалар өсөн тәғәйенләнгән индексыбыҙ - 50673, ярты йылға яҙылыу хаҡы - 360 һум 24 тин.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

ПРЕЗИДЕНТ БЛОГЫНАН




# ЙӘШӘҮ СЫҒАНАҒЫБЫҘ - ТӘБИҒӘТЕБЕҘҘӘ,

## ти Президентыбыҙға мөрәжәғәт итеүсе ғалимдар

Хөрмәтле Рөстәм Зәки улы!

Беҙ, Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге Биология институтының һәм Ботаник баҡса-институтының, Башҡорт дәүләт университетының һәм БР Тормош-көнкүреш именлеге ғилми-тикшеренеү институтының биологик күп төрлөлөктө һаҡлау проблемалары өлкәһендә эшләүсе бер төркөм ғалимдары һәм белгестәре, Һеҙгә, Президент булараҡ та, Башҡортостандың тәбиғәтен һаҡлау эшенә ҙур өлөш индергән дәүләт эшмәкәре булараҡ та мөрәжәғәт итәбеҙ. Беҙ Башҡортостан Республикаһының әлеге ваҡытта айырым һаҡланған тәбиғәт территориялары системаһының ғәмәлдә имен булмаған торошона етди иғтибар бүлеүегеҙҙе һорайбыҙ.

Башҡортостан Республикаһы Министрҙар кабинеты тарафынан "БР-ҙың айырым һаҡланыусы тәбиғәт территориялары системаһы" тигән уникаль проект эшләнгәйне һәм раҫланғайны. Был проектта "Ағиҙел", "Ирәмәл", "Ҡырҡты" һәм "Ирәндек" тәбиғәт парктары ойоштороу планлаштырылғайны һәм ул БР Министрҙар кабинетының 2002 йылдың 1 октябрендәге 293-сө һанлы "БР-ҙың айырым һаҡланған тәбиғәт территориялары өсөн ерҙәрҙе резервлау тураһында"ғы ҡарары менән нығытылғайны һәм "2004 - 2010 йылдарға экология һәм тәбиғәт ресурстары" Республика маҡсатлы программаһында раҫланғайны. Әммә был тәбиғәт парктарының береһе лә әлегәсә ойошторолмаған.

Бөтөн донъяла һәм Рәсәй Федерацияһының күпселек төбәктәрендә айырым һаҡланған тәбиғәт территорияларының майҙанын арттырыу процесы бара, әммә БР Хөкүмәте республиканың айырым һаҡланған тәбиғәт территориялары системаһын үҫтереүгә түгел, ә уларҙың майҙанын кәметеүгә йүнәлтелгән ҡарар ҡабул итә. Мәҫәлән, 2009 йылдың 29 ғинуарында ҡабул ителгән 23-сө һанлы ҡарар нигеҙендә Ишембай заказнигының майҙаны, урындағы халыҡҡа хужалыҡ маҡсатында ағас ҡырҡыу мөмкинлеге биреү һылтауы менән, 13971 гектарға кәметелде. Ғәмәлдә, урындағы халыҡ өсөн заказник составынан алынған участкалар бер ниндәй ҙә мәсьәләне хәл итмәй, сөнки унда кәрәкле, эшкә яраҡлы ағас юҡ.

**Хәҙер республика йәмәғәтселеге тәбиғәт ҡомартҡылары - Торатау менән Йөрәктау юҡҡа сығарылмаһын өсөн көрәшә.** Ҙур тырышлыҡ менән "Алтын солоҡ" ҡурсаулығын - Бөрйән солоҡ ҡортон һаҡлап ҡалыу мөмкин булды.

Тәбиғәт һәйкәлдәренең 30 проценты рекреацион һәм көтөүлек дигрессияһының 3-4-се стадияһында тора, бер нисәһе юҡҡа сыҡҡан. Бөгөн тиҫтәләрсә тәбиғәт ҡомартҡыһының юридик сиге, майҙаны, һаҡлау режимы юҡ. Күпселек дәүләт тәбиғәт ҡурсаулыҡтарында ағас ҡырҡыла, һөҙөмтәлә, был территориялар тәбиғәтте һаҡлауҙың ҡиммәтен юғалта; ҡурсаулыҡтарҙың төп бәләһе булып төп ҡулланылыштан тыш, барлыҡ төр ағас ҡырҡыуға рөхсәт биргән Айырым һаҡланыусы тәбиғәт территориялары тураһындағы положение тора.

Йомағужа һыу һаҡлағысы төҙөү һөҙөмтәһендә Башҡортостан Республикаһы кисергән биологик күп төрлөлөктө юғалтыуҙы Хөкүмәт яңы айырым һаҡланған тәбиғәт территориялары ойоштороу, тәү сиратта, Шүлгәнташ ҡурсаулығын киңәйтеү иҫәбенә (киңәйтеү проекты күптән әҙер) компенсацияларға вәғәҙә итте. Әммә бер нәмә лә эшләнмәне.

Әлеге ваҡытта Көньяҡ Урал дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығы территорияһында тау саңғыһы трассаһын төҙөү планлаштырыла. Уны ҡурсаулыҡҡа зыян килтермәй, планлаштырылған "Ирәмәл" тәбиғәт паркы территорияһында йәки Елмәрҙәк һыртында төҙөргә мөмкин. Был "Ирәмәл" йәки "Инйәр" тәбиғәт паркын үҫтереү өсөн ҡеүәтле стимул булыр ине.

Республиканың айырым һаҡланған тәбиғәт территорияларының идара системаһы торошо ҡәнәғәтләнерлек түгел. БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығында БР-ҙың айырым һаҡланған тәбиғәт территорияларындағы барлыҡ проблемалар хаҡында тулы мәғлүмәт бар. Сөнки улар айырым һаҡланған тәбиғәт территориялары бүлектәрен инвентаризациялау тураһында БР-ҙың Тормош-көнкүреш именлеге ғилми-тикшеренеү институтынан йыл һайын отчет алып тора. Әммә асыҡланған проблемалар буйынса ҡарарҙар әкрен ҡабул ителә, проблемалар хәл ителеүгә ҡарағанда, йыйыла бара. "БР-ҙың айырым һаҡланған тәбиғәт территориялары кадастры" геомәғлүмәт системаһы (ГИС) ойоштороу Айырым һаҡланған тәбиғәт территорияларында тупланған проблемаларҙы хәл итеүгә булышлыҡ итер ине, тик ул беҙҙә һаман төҙөлмәгән. БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы бер нисә йыл был эште финанслауҙы һуҙа. Күрше өлкәләрҙә бындай ГИС-тар күптән ойошторолған.

Ҡайһы бер проблемаларҙы хәл итеү өсөн федераль ҡануниәтте үҙгәртеү зарур. Мәҫәлән, тәбиғәт парктарын үҫтереү РФ Ер кодексының даими файҙаланыуҙа булған ерҙәрҙе ҡуртымға тапшырыуҙы тыйған 20-се статьяһы 4-се пункты менән туҡтатылып тора. Был тәбиғәт парктарының рекреацион инфраструктураһын шәхси эшҡыуарлыҡ иҫәбенә үҫтереүгә кәртә ҡуя, тап шул арҡала беҙҙең барлыҡ парктар ярлы һәм яҡшы сервис менән тәьмин ителә алмай.

Беҙ Һеҙгә БР-ҙың айырым һаҡланған тәбиғәт территориялары системаһы проблемаларын хәл итеү буйынса үҙебеҙҙең аныҡ тәҡдимдәребеҙҙе күрһәтергә әҙер. Был Башҡортостандың экологик туризмын үҫтереүгә, уникаль төбәктең биологик күп төрлөлөгөн һаҡлауға ярҙам итер ине.

**Б. М. МИРКИН,**
**БР Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы, Башҡорт дәүләт университетының экология кафедраһы мөдире, БР-ҙың һәм РФ-ның атҡаҙанған фән эшмәкәре, биология фәндәре докторы.**

**В. Б. МАРТЫНЕНКО,**
**Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө фәнни үҙәге Биология институтының лаборатория мөдире, биология фәндәре докторы.**

**А. А. МУЛДАШЕВ,**
**РФ-ның атҡаҙанған экологы, Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө фәнни үҙәге Биология институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре, биология фәндәре кандидаты.**

**Л. М. АБРАМОВА,**
**Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө фәнни үҙәге Ботаник баҡса-институтының лаборатория мөдире, биология фәндәре докторы, профессор.**

**Р. М. ХАЖИӘХМӘТОВ,**
**Башҡорт дәүләт университетының экология кафедраһы профессоры, биология фәндәре докторы.**

**(Шулай уҡ Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәге Биология институтының, БР-ҙың Тормош-көнкүреш именлеге ғилми-тикшеренеү институтының, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәге Ботаник баҡса-институтының башҡа ғилми хеҙмәткәрҙәре ҡул ҡуйған).**


"ТОРАТАУҘЫ ЕМЕРЕРГӘ БИРМӘБЕҘ!"

**РЕДАКЦИЯНАН. Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов үҙенең блогында Башҡортостанға Өфөлә йыл һайын үткәрелә торған халыҡ-ара форум зарурлығы мәсьәләһен күтәрҙе. Фекер алышыусылар төрлө тәҡдимдәрен белдерҙе лә инде. Күп авторҙар бөгөн республикала ғына түгел, тотош Рәсәйҙә, донъяла иң мөһим һәм әһәмиәтле тема булып экология проблемаһы тороуын һәм киләсәктә лә уның иң көнүҙәк булып ҡаласағын билдәләй. "Киске Өфө" гәзите коллективы ла, Башҡортостандың экологик хәл-торошона, тәбиғәтте һаҡлауға битараф булмағанлыҡтан, ошо тематиканы хуплай. Бөгөн тәбиғәтебеҙҙе һаҡлау тураһындағы хәстәрлектән дә изгерәге юҡ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Указы менән 2010-2011 уҡыу йылында дөйөм белем биреү учреждениелары һәм махсус мәктәптәрҙең уҡыуҙа, ижади эшмәкәрлектә һәм спортта юғары һөҙөмтәләргә өлгәшкән айырыуса һәләтле уҡыусыларына Башҡортостан Республикаһы Президентының айлыҡ стипендияларын билдәләргә ҡарар ителде.

✓Рәсәй Хөкүмәте етәксеһе Владимир Путин Түбәнге Новгородта "Нефть химияһын үҫтереү тураһында" тигән мәсьәлә буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Кәңәшмә эшендә БР Президенты Рөстәм Хәмитов ҡатнашты. Илдең нефть химияһы перспективаларын тикшереү менән бер рәттән, сарала "Салауатнефтеоргсинтез" асыҡ акционерҙар йәмғиәте менән "Каустик" асыҡ акционерҙар йәмғиәте араһында этилен поставкалау арҡаһында барлыҡҡа килгән бәхәс тураһында ла һүҙ барҙы. Ике предприятие араһында ҡайһы бер килешеүҙәргә нигеҙ һалынды.

✓БР Президенты Рөстәм Хәмитов етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһы "Берҙәм Рәсәй" партияһы төбәк бүлексәләренең Түбәнге Новгородта үткән төбәк-ара конференцияһында ҡатнашты. Пленар өлөш алдынан делегаттар иҡтисадтың төп тармаҡтарын үҫтереүгә йүнәлтелгән инвестиция проекттары тәҡдим ителгән күргәҙмәлә булды. Күргәҙмәнең Башҡортостан иҡтисадына арналған махсус стенды янында Владимир Путин менән Рөстәм Хәмитов йәнле әңгәмә ҡорҙо.

✓БР Секретариаты етәксеһе итеп Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың Урындағы үҙидаралыҡ һәм йәмәғәт берекмәләре буйынса комитеты рәйесе Зөфәр Ирғәле улы Еникеев тәғәйенләнде.

✓Ошо көндәрҙә "Уфагубъ" интернет-сайты икенсе тапҡыр экстремистик тип танылған. Беренсе тапҡыр былтыр мартта уға бындай вердикт сығарылғайны. Әммә быйыл июндә Юғары суд кассацион ялыу буйынса был ҡарарҙы көсөнән сығарып, эште ҡабат суд хөкөмөнә ебәрҙе. Хоҡуҡ һаҡлаусылар тағы ла үҙ ҡарашын раҫлай: милләт-ара дошманлыҡ тыуҙырыусы сайт экстремистик булып тора. Әлегә суд ҡарары көсөнә инмәгән.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Указы менән донъя кимәлендә танылған йырсы Асҡар Әмир улы Абдраҙаҡов Башҡортостан Республикаһының мәҙәниәт министры итеп тәғәйенләнде.

АҘНА ШАҢДАУЫ

# "МИН БАШҠОРТ. Ә БАШҠОРТОСТАН - БАШҠОРТТАР ИЛЕ",

## йәки "Коммерсантъ" журналисы Башҡортостан Президентының тамырҙарында Салауат Юлаевтың көрәштәштәрен эҙләй

**Үткән аҙнала айырыуса көслө шаңдау һәм шау-шыу тыуҙырған ваҡиғаларҙың береһе - үҙәк дөйөм мәғлүмәт сараларының Мәскәү мэры Юрий Лужков менән "яғалашыуы", тип уйлайһығыҙҙыр әле, моғайын. Эйе, ысынлап та, ваҡытлы матбуғат сараларында тауыш яман булды. Айырыуса, телеканалдар, атап әйткәндә, НТВ тырышты. Лужковтың үҙен дә буш итмәнеләр, хәләл ефетен дә ситтә ҡалдырманылар. Умарталарын да иҫкә төшөрҙөләр, баш ҡала урамдарындағы "тығындар"ҙы ла. Тарихи һәм мәҙәни ҡомартҡылар һаналған биналарҙы емереүҙе лә Лужковҡа япһарҙылар.**

Мәскәү халҡы аптыраймы-юҡмылыр был хәлгә, уныһы ҡараңғы. Бәлки, күнегеп тә бөткәндәрҙер, әммә беҙ, йәмәғәт, быға аптырамайбыҙ. Беҙ ундай шау-шыуҙы үҙ елкәбеҙҙә татып ҡараған. Ундай "ут, һыу һәм еҙ торбалар" аша үткән бар инде. Беҙҙең өсөн был пүстәк кенә. Шуға ла Үҙәктәге ҡаңғырыҡҡа бик иғтибар итмәйбеҙ. Һөйләһендәр әйҙә. Беҙгә бөгөн республикабыҙҙағы ваҡиғалар мөһим. Ә унда, Үҙәктә, Рәсәй Федерацияһының иң бай ҡалаһы һаналған Мәскәү менән инде нисәмә йыл идара иткән Юрий Лужковты ваҡытлы матбуғат саралары "дөмбәҫләпме дөмбәҫләй" икән, тимәк, шулай кәрәк. Башҡа губернаторҙарға (ә Мәскәү, билдәле булыуынса, Башҡортостан, Татарстан йәки Силәбе өлкәһе кеүек үк, Федерацияның айырым бер төбәге, ә уның етәксеһе - өлкә губернаторы йәки республика президенты менән тиң) ишара был. Тыңламаһағыҙ, ҡушҡанды эшләмәһәгеҙ, йәки, Аллам һаҡлаһын, ҡушмағанды эшләй башлаһағыҙ, Лужков яҙмышы көтә һеҙҙе лә.

Шуныһы ғына ғәжәпләндерә, Юрий Михайлович бит ябай "гөбөрнатыр" түгел, ул бөгөн Рәсәйҙең иң эре сәйәси партияһы булған, Дәүләт Думаһында абсолют күпселекте тәшкил иткән һәм башында, юҡ, юҡ, башында ғына түгел, ә ғәләмәт башында, иң өҫтә, үрҙең дә үрендә, теләһә кем түгел, ә партияның (саҡ-саҡ "милләттең" тип ысҡындырманым) лидеры Владимир Владимирович Путин торған "Берҙәм Рәсәй"гә нигеҙ һалыусы һәм һаман да уның иң юғары етәксе органдарының ағзаһы ла баһа! Әллә, мәйтәм, "етәкләп алып йөрөтөүсе һәм юл күрһәтеүсе" фирҡәбеҙ эсендә тарҡалыу һәм бүленеү процестары башланды микән? Партиябыҙ большевиктарға һәм меньшевиктарға айырылыу алдындамы әллә? Уңғамы, һуңғамы, тимәк?..

Хәйер, кемгә нисектер, миңенсә (һәм күптәрҙең фекеренсә), үткән аҙнала иң оло шаңдау тыуҙырған ваҡиға - ул Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитовтың "Коммерсантъ" гәзитендәге интервьюһы. Башҡортостан халҡы өсөн генә түгел, ғөмүмән, бөтә Рәсәй өсөн дә оло ваҡиға был. Интернетта ошо материалды тиҫтәләгән сайттарҙа күсереп баҫыуҙары һәм цитаталарға таратып алыуҙары ғына үҙе ни тора! Ни өсөн тип һорайһығыҙмы? Аңлатып ҡарайым. Лужков - ул Рәсәй сәйәсәтенең кисәгеһе. Һәм ниндәйҙер кимәлдә бөгөнгөһө. Лужков барыбер китәсәк. Китергә мәжбүр буласаҡ. Күпме ҡырталашһа ла. Күпме талашһа ла. Йә Шәймиевса китәсәк. Йә - Рәхимовса. Үҙе өсөн өсөнсө юл уйлап тапмаһа ғына инде.

Ә Хәмитов - Рәсәйҙең иртәгәһе. Уның һәм власҡа бөгөн килеүсе башҡа төбәк етәкселәре алдында илдең киләсәген булдырыу бурысы тора. Һәм уның интервьюла әйтелгән фекерҙәре башлыса Башҡортостанға ғына ҡағылған һымаҡ тойолһа ла, асылда иһә, илдең алдағы биш, ә уҙа китһә, ун йылғы тормошона ҡараш ташларға мөмкинлек бирә. Әйтергә кәрәк, Хәмитовтың интервьюһы төрлө яҡлап ҡыҙыҡлы. Иң тәүҙә ул күләме менән хайран ҡалдыра. Быға тиклем, хәтерләүемсә, был баҫма биттәрендә Владимир Путиндың Алыҫ Көнсығыш буйынса журналист Александр Колесниковҡа биргән интервьюһы ғына ошондай ҙур форматта донъя күргәйне. Рөстәм Хәмитовтыҡы унан бер ҙә кәм түгел. Артығыраҡ булмаһа. Хәйер, эш күләмдә генә түгел бит. Республиканың киләсәге менән ҡыҙыҡһынған һәр бер кеше был интервьюнан үҙе теләгәнде таба аласаҡ. Иғтибар менән уҡып ҡына сығырға кәрәк.

Әңгәмәне ойоштороусы журналист Павел Шеремет мәҡәләнең баш һүҙен сағыу, яңғырауыҡлы, алыҫтан үҙенә саҡырып торорлоҡ итеп эшләргә тырышҡан. Асылда иһә, "ултыртыуҙар" һәм "процестар" хаҡында һүҙ интервьюның бик аҙ өлөшөн алып тора. Ә бына Хәмитовтың тормош принциптары һәм ҡайһы бер мәсьәләләргә ҡараштары күптәр өсөн асыш һымағыраҡ яңғырағандыр. Интервьюла Рөстәм Зәки улы алға ҡарап, киләсәк менән йәшәгән, уны яҡынайтырға тырышҡан шәхес булараҡ һынлана. "2010 йылдың авгусына тиклем булған хәлдәр мине бик аҙ ҡыҙыҡһындыра, -ти ул.- Миңә тиклем булған конфликттарға һәм мин тәғәйенләнгәнгә хәтлем барған процестарға инергә бер генә лә теләгем юҡ. Махсус тикшереүҙәр йәки эҙәрләкләүҙәр ойоштороорға йыйынмайым. Үткәндәр менән шөғөлләнә башлаһам, бөгөнгө һәм иртәнге мәсьәләләрҙе сисә алмаясаҡмын. Был минең тормош рәүешем", - тип йөпләп ҡуя ул өҫтә әйтеп үткәндәрен.

Был нимәне аңлата һуң? Ошо белдереүе менән Рөстәм Хәмитов, йәмәғәтселеккә, чиновниктарға, эшҡыуарҙарға, ғөмүмән, республика халҡына тормошто яңы, таҙа биттән башларға мөмкинлек тыуҙырылды, файҙаланып ҡалығыҙ, тигән үҙенсәлекле сигнал бирә.

Әйтергә кәрәк, интервьюла бындай сигналдар бихисап. Мәҫәлән, Павел Шереметтың милли мәсьәләләргә ҡағылышлы уратып-суратып ҡуйылған һорауҙарына Рөстәм Хәмитов асыҡ, аныҡ, төплө яуап ҡайтара. Ҡыл да ҡыҫтырырлыҡ түгел. "Өфө милли факторҙы Мәскәүҙе шантажлау өсөн ҡулланды. Миңенсә, был факторҙы һеҙгә ҡаршы булыусылар һеҙгә ҡаршы борасаҡ", тип фараз итә журналист. Яуап яп-ябай. Ап-асыҡ. Уны бер нисек тә бороп, үҙгәртеп, башҡа төрлө итеп булмай: **"Мин - башҡорт, һәм үҙемде башҡорт халҡынан тыш күҙ алдына ла килтерә алмайым, - ти Рөстәм Хәмитов. - Һуңғы ваҡытта Башҡортостанда ете быуынға тиклем шәжәрә төҙөү менән мауығалар (һәм дөрөҫ эшләйҙәр). Беҙ атайым менән бергәләп был эште үткән быуаттың 80-се йылдарында уҡ башҡарып сыҡтыҡ һәм һигеҙенсе быуыныбыҙға тиклем асыҡланыҡ. Башҡа ата-бабаларыбыҙ кеүек үк, ул да (һигеҙенсе быуыны-Ред.) башҡорт. Муллахәмит Ҡариҙел районының башҡорт ауылында XVII быуаттың башында йәшәгән..."** Рөстәм Хәмитовтың башҡорт булыуына ышанмағандарға тура яуап был. Башҡортлоҡ - борон-борондан иң тәүҙә рух сағылышы. Ә рухһыҙ кешенең асыҡтан-асыҡ үҙ милләтен танырға һәм был хаҡта белдерергә көсө етмәй. Һүҙ - рухи көс хаҡында. Хәмитов башҡорт халҡының холҡон да, тәбиғәтен дә ("менталитет" тигән сит ил һүҙен ҡулланғы килмәй) яҡшы белә. Был уның артабанғы һорауҙарға яуабында асыҡ күренә. "Бунтарь рухы һеҙҙә бармы?" тип ҡыҙыҡһына Павел Шеремет. "Әлбиттә, - ти Рөстәм Хәмитов, - ул һәр бер башҡорттоң холҡонда, ғәҙелһеҙлеккә ҡырҡа ҡаршы мөнәсәбәт менән бергә. Әммә икенсе яҡтан, башҡорттар ифрат ышаныусан, ҡунаҡсыл, башҡаларға һәр саҡ дуҫтарса мөнәсәбәттә. Шул уҡ ваҡытта ҡыҙып китеүсәнбеҙ. Шундай халыҡ беҙ", -тип тамамлай был хаҡтағы һүҙен республика башлығы.

Был - милләткә характеристика биреү генә түгел. Р. Хәмитовтың был һүҙҙәре, етәксе үҙгәреү менән генә халыҡ бөтмәй, юҡҡа сыҡмай, тиеүе, башҡортто "ерләп", уның мәҙәниәтен, тарихын, айырыуса һуңғы арала телен дә бөтөрөргә маташыусыларға киҫәтеүе.

Ошонда уҡ Рөстәм Зәки улы башҡорт халҡының ике теллелеге хаҡында хәбәрҙар булыуын белгертеп үтә. "Башҡорттарҙың бер өлөшө көньяҡта таралған һөйләштә аралаша, ә республиканың көнбайышында һәм төньяғында йәшәгән башҡорттар - татар һөйләшендә", ти ул. "Ҡайһы берәүҙәр ошонан файҙаланып халыҡтың башын бутарға, милләтте тарҡатырға тырыша", тип белдерә Рөстәм Хәмитов. Был иһә Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәле етеп килгән ваҡытта Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында Ҡаҙан тарафтарынан килеп, башҡорт "татарҙар"ын асыҡлау һәм өгөтләүгә йүнәлтелгән "эш"те ойоштороусыларға аныҡ яуап.

Һәм һуңғыһы. Ни өсөн Башҡортостан Президентының был, асылда, программалы интервьюһы тап "Коммерсантъ" биттәрендә донъя күрҙе икән? Тиражы үтә күп түгел һымаҡ. Рәсәй буйынса 103 мең дән саҡ ҡына ашыу. "Комсомолка"ны алдырып һәм һатып алып уҡыусыларҙың һаны бер нисә миллионға етә. Әйтәйек, республиканың төп баҫмалары һаналған "Башҡортостан", "Республика Башҡортостан" һәм "Ҡыҙыл таң" гәзиттәренең дөйөм тиражы 80 мең дән ашып китә. Ә инде "Йәшлек", "Молодежная газета" һәм "Өмет"тәрҙе лә ҡушһаң... Күрәһең, "Коммерсантъ"тың илдең сәйәси һәм эшлекле даирәләре араһында киң таралған һәм популяр булыуы Башҡортостан башлығын үҙ фекерҙәрен, идеяларын еткереү өсөн тап уны һайларға мәжбүр иткәндер. Бөгөн бары тик ошо баҫма биттәрендә генә Путиндың матбуғат хеҙмәте тарафынан шымартылмаған һәм "йомшартылмаған" интервьюһы донъя күрә ала бит. Ә, бәлки, "Коммерсантъ" журналистары өлгөрөрәк һәм өлгөргәнерәктер?



**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Йәрмәкәй районы хакимиәте башлығы Дифғәт Хантимеровты биләгән вазифаһынан бушатырға ҡарар итте. Сәбәбе - интернет селтәрендә урынлаштырылған видеоролик. Унда Дифғәт Хантимеров спорт залында уҡыусылар менән дәрес үткәрә һәм иҙәнгә тиклем эйелгән баланан аяғын үбеүҙе талап итә.

✔ Конгресс-холда "Профессиональ мәғариф һәм социаль партнерҙар: хеҙмәттәшлектең яңы юлдары" тигән темаға түңәрәк ҡор үтте. Тармаҡ министрлыҡтары һәм ведомстволары, предприятиелар, профессиональ мәғариф учреждениелары етәкселәре ҡатнашлығында үткән түңәрәк ҡорҙоң маҡсаты - эш биреүселәр һәм профессиональ белем биреүселәр араһындағы бәйләнеш механизмдарын үҫтереү.

✔ Яҡын йылдарҙа АФК "Система" Башҡортостан Республикаһы иҡтисады тармаҡтарын инвестициялауға 100 млрд һумдан ашыу аҡса һаласаҡ. БР Президенты Рөстәм Хәмитовтың АФК "Система"ның өлкән вице-президенты Александр Корсиков, финанс корпорацияһының башҡарыусы вице-президенты Петр Безукладников менән булған осрашыуында ошондай ҡарарға киленде.

✔ Ейәнсура районында 2007 йылдан ВИЧ-инфекциялы булып иҫәптә торған 24 йәшлек ҡатын үҙ партнерҙарынан сирен йәшермәйәсәге тураһында дауаханала тейешле расписка ҡалдыра. Әммә спиртлы эсемлектәр ҡулланыуын һәм ир-ат "коллекцияһы"н йыйыуын туҡтатмай. Һөҙөмтәлә уға ҡарата енәйәт эше асыла. Ләкин бәйеле аҙған ҡатын тикшереү барышында ла өс кешене зыянлап өлгөрә. Уның "коллекцияһы"ндағы 12 кеше әлегә аныҡ ҡына диагнозын белмәй, сөнки сирҙең инкубация осоро бер нисә айға тиклем һуҙыла.

✔ Рәсәйҙәрҙең күпселеге (57 процент) илдең төп бәләһе тип алкоголизмды һәм наркоманлыҡты билдәләй. Шулай уҡ лидерҙар араһына социаль-иҡтисади характерҙағы проблемалар инә: инфляция (55 процент) эшһеҙлек (50 процент). Һорау алыуҙа Рәсәйҙең 42 крайы һәм республикаһының 140 төрлө халыҡ йәшәгән пункттан 1,6 мең кеше ҡатнашҡан.

***✓ Күп балалы һәм аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән балаларға өҫтәмә дотация рәүешендә ҡала бюджетынан аҡса бүленә. Ул быйыл бер кешегә 15 һум тәшкил итә.***



ТӨРЛӨҺӨНӨН

# ЙӘРМИНКӘЛӘР ҺӘМ... мәктәп ашханалары тураһында

**Өфөлә ауыл хужалығы йәрминкәләре миҙгеле башланыуға һынаулы ғына көндәр ҡалды. Көҙгө йәрминкәләр рәсми рәүештә 25 сентябрҙә эш башлаясаҡ һәм 31 октябргәсә дауам итәсәк. Ауыл хужалығы йәрминкәләрен үткәреү өсөн 20-нән ашыу майҙан әҙерләнгән. Был хаҡта Өфө округы хакимиәтенең ҡулланыусылар баҙары идаралығы начальнигы Ирина Рублева матбуғат конференцияһында хәбәр итте.**

- Йәрминкәләр рәсми рәүештә асылмаһа ла, һәр ял көнө эшләп килә. Тәүге саралар, атап әйткәндә, бал йәрминкәһе 4-5 сентябрҙә уҡ булып үтте. 11 сентябрҙә "Аврора" кинотеатры янында картуф һатыу ойошторолдо. Алдағы шәмбе, йәғни 18 сентябрь көнө, Спорт һарайы янында шундай уҡ йәрминкә үткәреләсәк. Йәрминкәләрҙең планлаштырған ваҡыттан алдараҡ эш башлауы картуфҡа ажиотаж булдырмау маҡсаты менән эшләнә.

И. Рублева әйтеүенсә, быйылғы йәрминкәләргә бер үҙгәреш индерелде. Алдағы йылдарҙа тауар һатыу тулыһынса райондарҙағы крәҫтиән, фермер хужалыҡтарына ғына йөкмәтелһә, быйыл ситтән килтерелгән продукция, бигерәк тә картуф һатыусыларға ла урындар биреләсәк. Был аҙым картуфҡа хаҡтың түбәнәйеүенә килтерергә тейеш. Әле Өфөлә бер килограмм картуф уртаса 18-20 һум тора.

- Махсус положениеға ярашлы, - тине И. Рублева, - Өфө ҡалаһы райондары ла ошондай йәрминкәләр үткәрергә хоҡуҡлы. Бының өсөн бары тик республика райондары менән килешергә кәрәк.

И. Рублева шулай уҡ ағымдағы йылда мәктәп ашханалары торошо тураһында ла мәғлүмәт биреп уҙҙы. Билдәләнеүенсә, мәктәп ашханаларында туҡланыусы балаларҙың һаны 98 процентҡа тиклем күтәрелгән. Үҫеш башлыса ата-әсәләрҙән йыйып алынған аҡса ярҙамында булдырылған (70 процент).

- Күп балалы һәм аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән балаларға өҫтәмә дотация рәүешендә ҡала бюджетынан аҡса бүленә. Ул быйыл бер кешегә 15 һум тәшкил итә. Шулай уҡ, хаҡтар артыуы сәбәпле түләнә торған компенсация ла былтырғынан күберәк - 3,5 һум.

И.Рублева һүҙҙәре буйынса, баш ҡала мәктәптәрендә 2007 йылдан бирле "Мәктәп һөтө" исемле программа эшләй. Был программаға ярашлы, башланғыс кластар уҡыусыларына аҙнаһына өс тапҡыр бушлай һөт бирелә. Бының өсөн былтырғы йылда ҡала бюджетынан 36 миллион һум аҡса бүлеү ҡаралған.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Өфөләге хаҡтар буйынса бер нисә һүҙ. Баш ҡалала Волга буйы федераль округы менән сағыштырғанда алмаға хаҡтар иң юғарыһы. Уның килограмы 60 һум тора. Шулай уҡ арыш-бойҙай ононан бешерелгән икмәккә лә хаҡтар юғары - бер килограмы 24,47 һум.**

**Шул уҡ ваҡытта беҙҙә шәкәр (1 кг-32,56 һум), кәбеҫтә (1 кг - 24,73 һум) һәм он (1 кг - 17,44 һум) иң арзаны.**

**Мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, август айында картуфтың уртаса хаҡы килограмына 24 һум, һыйыр ите - 169 һум, май 189 һум тәшкил иткән.**

*Илгиз **ИШБУЛАТОВ** әҙерләне.*

РЕФОРМАНЫҢ ЯҠШЫҺЫ...

# ТАҘАРТҠАН УРЫНДА ТҮГЕЛ...

## сүпләмәгән урында таҙа



**Бөгөн кеше шул тиклем уңайлыҡҡа өйрәнде, хатта ауылдарҙа ла ҡалалағы кеүек барлыҡ шарттары булған йорттар төҙөйҙәр, элек төҙөлгән йорттарға заманса коммуникация үткәрәләр. Торлаҡ-коммуналь хужалығы реформаһы район үҙәктәрендә, ҡалаларҙа авария хәлендәге йорттарҙан кешеләрҙе яңы фатирҙарға күсереү, ремонт эштәре атҡарыуға булышлыҡ итә. Тиҙҙән иһә йылытыу миҙгеле башланасаҡ. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәрҙәре әле шул эштәр менән мәшғүл. Ошо йәһәттән Дим районының Торлаҡ милекселәре ширҡәте рәйесе Илдус ҠОЛЬЯРИНды редакцияға саҡырып, уның уй-фекерҙәрен тыңланыҡ, торлаҡ-коммуналь хужалығы эшмәкәрлеге, ундағы яңылыҡтар, проблемалар менән яҡындан таныштыҡ.**

### Нимә ул Торлаҡ милекселәре ширҡәте?

Торлаҡ милекселәре ширҡәте (Товарищество собственников жилья) - 185-се "Торлаҡ-коммуналь хужалығын реформалауға булышлыҡ итеү фонды тураһында" Федераль Закон нигеҙендә төҙөлә. Был ойошма, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, торлаҡ-эксплуатация участкаларынан айырмалы, бер кемгә лә буйһонмай. Административ-территория буйынса райондағы хакимиәтенә генә буйһона. Шунан да өҫтәрәк торған ведомство юҡ.

Бөгөн республика буйынса меңдән ашыу торлаҡ милекселәре ширҡәте ойошторолған, шуларҙың 700 самаһы - Өфөлә. 2012 йылға бөтә торлаҡ-коммуналь хужалығының 85 процентын торлаҡ милекселәре ширҡәте алыштырырға тейеш, әле ул 25 процентты тәшкил итә.

Торлаҡ-коммуналь хужалыҡтар менән, юридик шәхес булараҡ, баш ҡаланың торлаҡ-коммуналь хужалығы идаралығы етәкселек итә, ә торлаҡ милекселәре ширҡәте - үҙе юридик шәхес. Идара итеү органы - дөйөм йыйылыш. Унда идара һайлана, идара рәйесе һайлай. Айырма, тимәк, идара итеү системаһының үҙендә. Идара аппаратында - 5-6 кеше иҫәпләнә. Хеҙмәтләндереү персоналы - 20-25 кеше. Дөйөм алғанда, 25600 кв метр майҙанды хеҙмәтләндерәбеҙ. Был инде өс туғыҙ ҡатлы, бер 10 ҡатлы йорт. Бөтә иҫәп-хисап шул квадрат метрҙарҙан сығып иҫәпләнә. Торлаҡ милекселәренә иҡтисади яҡтан ташлама яһала. Йыл һайын дөйөм йыйылышта ниндәй эштәр эшләргә икәненебеҙҙе билдәләйбеҙ, килем һәм сығым сметаһын раҫлайбыҙ. Бөтөн ошо эштәрҙә халыҡ үҙе ҡатнаша.

Торлаҡ милекселәре ширҡәтенә күсеп, уның ағзалары үҙ йорто хужалығын үҙе ҡарай башлай. Йәғни һәр фатир хужаһы һәр квадрат метрға 14 һум самаһы аҡса түләй. Был инде йортто тотоу статьяһы буйынса алына. Коммуналь хеҙмәттәргә аҡса айырым түләнә. Мәҫәлән, "Водоканал" һыу бирә - һыу өсөн уға түләнә, "Башкирэнерго" ут менән тәьмин итә - аҡса уға түләнә. Йорттарҙы ҡарау статьяһына инде торлаҡты техник хеҙмәтләндереү - коммуникациялар, инженерҙар селтәре, ихаталарҙы ҡарау, подъездарҙы тәртиптә тотоу, ағымдағы ремонт, авария хеҙмәтләндереүе, йылылыҡ, ут, һыу биреүҙе контролләү һ.б. инә.

### Үҙең ултырған ботаҡты киҫмә!

Ниндәй мөхиттә йәшәйһең, ниндәй мөхит урап алған, кеше шуға өйрәнә. Йәмғиәттә бер төрлө булып, подъезына инеү менән тиҙ генә үҙгәреп китеп булмайҙыр ул. Әммә ете йыл эшләү дәүерендә шуға инандым: кешенең үҙ мәнфәғәтен нисек хәстәрләүен күрһәтеүсе өс күрһәткес бар:

Беренсе -подъезд, ундағы таҙалыҡ. Тәҙрәләрҙә, ишектәрҙә ватмайҙар. Иң яҡшы күрһәткес - лифт ватылмай. Ярты йыл инде был турала ялыу ишеткәнем юҡ.

Икенсе - урамда хоккей ҡумтаһы бар. Элек балалар уны һүтеп ала ла ҡуя ине, хәҙер ул төҙөк тора.

Өсөнсө - ете йылдың өсөһөндә ағас үҫтерә алманыҡ. Әле бына был өлкәлә лә эш алға китте. Әйтәләр бит, йәшелегендә ағас үлтырһаң, ҡартайғас, күләгәлә йәшенер урын булыр, тип. Шуға ағастар үҫтереүгә лә беҙ бик әһәмиәтле эш тип ҡарайбыҙ.

Ете йыл торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһендә эшләү дәүерендә халыҡтың менталитеты үҙгәрә башлауын тойҙом. Беҙҙә бит кеше хеҙмәтен ихтирам итмәйҙәр. Ә хәҙер шуны аңлай баралар: һәр хеҙмәт халыҡтың, айырым кешенең мәнфәғәте, уларға яҡшы, уңайлы булһын өсөн эшләнә. Беҙҙең коллективта профессионалдар, үҙ эшен яратып башҡарыусылар тупланған. Улар халыҡҡа унайлыҡ, именлек, хәүефһеҙ тормош тәьмин итә.

Элегерәк күптәр коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙе кисектереп, тоҡҡарлап, нисек тә булһа түләмәҫкә тырыша ине. Ундайҙарҙы тәүҙә саҡырып һөйләшеү үткәрәбеҙ. Килмәһә, фатирына барабыҙ, саҡырыу-иҫкәртеү ҡағыҙы ҡалдырабыҙ. Шунан һуң да һүҙып йөрөп, алты айҙан ашһа, судҡа бирәбеҙ. Беҙҙә ундайҙар күп түгел, 3-4 кеше генә. Халыҡ нисек эшләгәнебеҙҙе белә, улар менән компаньон, дуҫ булып бөттөк. Закон буйынса, компаньондар насар йәшәй алмай, быға хоҡуҡтары юҡ. Уйлап ҡараһаң, магазинда икмәккә түләмәһәң, бирмәйҙәр. Ә беҙ шундай уҡ хеҙмәт күрһәтәбеҙ, тик уны аванс итеп бирәбеҙ.

Мәҫәлән, бер фатирҙа йәш ғаилә йәшәй. Әсәләре элек даими түләп

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә опека һәм попечителлек буйынса идаралыҡ начальнигы Милана Скоробогатованың ҡараусыһыҙ ҡалған балалар тураһындағы сығышы тыңланды. Билдәләнеүенсә, әле Өфөлә балалар йорттары тәрбиәләнеүселәре булған мең ярым тирәһе йәш кеше лицей, колледж, вуздарҙа уҡый. Балалар йорттарынан һуң улар яҙмыш ҡосағына ташлана. "Улар өсөн махсус социаль ҡунаҡханалар төҙөү өлгөрөп еткән мәсьәлә", тине хакимиәт башлығы Павел Качкаев. Әлбиттә, былдай проекттар Рәсәйҙә юҡ, әммә Өфөбеҙ ошо йәһәттән дә башҡаларға өлгө күрһәтһә, насар булмаҫ ине.

✓Сентябрҙең тәүге яртыһында Башҡортостанда 8615 кеше ОРВИ менән сирләне, уларҙың 70 проценты - балалар. Билдәләнеүенсә, республикала ОРВИ менән ауырыу эпидемия сигенән 20,1 процентҡа түбәнерәк.

✓Оҙаҡламай баш ҡалабыҙҙа яңы транспорт хеҙмәте төрҙәре -"мосолмандар өсөн такси" һәм "ҡатын-ҡыҙҙар өсөн такси" барлыҡҡа киләсәк. Ғәҙәттәге транспорт төрөнән "Хәләл" транспорт шуныһы менән айырыла: ҡатын-ҡыҙҙар водителе ҡатын-ҡыҙ булған таксиҙа йөрөйәсәк. Водителдең мосолман булыуы мотлаҡ түгел, әммә ул машина йөрөткәндә тәмәке тартмаҫҡа, телефондан һөйләшеүҙәр алып бармаҫҡа, музыка ҡысҡыртмаҫҡа тейеш.

✓Өфө халҡы үҫеүгә табан бара. Йыл башынан баш ҡалала 8,5 мең бала тыуған. Ә тәбиғи үҫеш бер мендән ашыу кеше тәшкил итә. Баш ҡаланың социаль-иҡтисади үҫешендә лә үҙгәрештәр бар. Эшһеҙлек кимәле былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 12 процентҡа кәмеген. Уртаса эш хаҡы 21 мең һум тәшкил итә. Йыл башынан өфөлә 294 кв. метр торлаҡ сафҡа индерелгән.

✓Ҡаланан ситтәге йорттарға, коттеджарға һәм таун-хаустарға хаҡтар кәмемәй һәм 1 кв. метрына 26,7 мең һум тәшкил итә. Был йыл башынан хаҡтар 10,3 процентҡа артҡан, тигән һүҙ. Иглиндағы иң арзан йорт, мәҫәлән, 390 мең һум тора. Ә иң ҡиммәт йорттоң хаҡы 20 млн тирәһе. Ер участкалары бигерәк тә Чесноковка ҡасабаһында ҡиммәт (2300 мең һум тирәһе). Ә иң арзан участка Иглинда, 120 мең һум.

тора ине, хәҙер фатирын балаларына ҡалдырып, ауылға китте. Ә балалары фатир өсөн түләмәй аптыратты. Саҡырып һөйләштем. Нимә өсөн түләгәндәрен аңлаттым. "Һеҙлем, һин йыуынһын өсөн йылы, һыуыҡ һыу бирәбеҙ, ҡараңғыла йөрөмәһен тип ут яҡтыртабыҙ, иртән тороуыңа ҡарҙы көрәп ҡуйбыҙ. Һин бит шуның өсөн - үҙендең унайлыҡтарың һәм тейешле шарттарың өсөн түләйһең", - тием. Аңланы, хәҙер беҙ иң яҡшы дуҫтар.

Ғөмүмән, бөгөн халыҡтың 70-80 проценты быңдай идара итеү системаһының үҙен аҡлауын аңланы. Әммә хакимиәткә, торлаҡ инспекцияһына ялыу яҙыусылар һәр ерҙә лә бар. Йәнәһе лә, түләүҙәр күп, торлаҡ милекселәре ширҡәте алама эшләй. Һөҙөмтәлә хакимиәттән - участка милиционеры, торлаҡ инспекцияһынан инспектор килә. Улар тота ла торлаҡ милекселәре ширҡәте етәксеһенә йәки ойошмаға штраф һала. 40 меңгә тиклем. Тимәк, торлаҡ милекселәре ширҡәте 40 меңлек эште эшләп еткерә алмай, ҡайһылыр хеҙмәт төрөнә зыян килә. Шулай итеп, кеше уйлап тормай, уҙ-үҙенә зыян килтерә, үҙе ултырған ботаҡты үҙе киҫә. Ундайҙар танау төбөнән ары күрә алмаған, законды белмәгән кешеләр. Саҡырып һөйләшә, аңлата торғас, хәҙер аңланылар.

Бында беҙҙең дә гәйеп бар. Сөнки ваҡытында уларҙың ялыуына илтифат бирееп еткермәйбеҙ. Беҙ, етәксебеҙме, ябай хеҙмәткәрме - милексенең аҡсаһынан эш хаҡы алабыҙ. Шуға ла һәр кем ҡайҙан аҡса килгәнен аңларға тейеш. Ә беҙҙә етәкселәр, кереһенсә, өйҙә кем хужа икәнлеген күрһәтергә тырышып, мәсьәләне киҫкенләштерә. Беҙ хаҡлыҡтың һәм дәүләттең заказын ғына үтәйбеҙ. Президенттың блогында ла ошо беҙ эшләгән өлкә буйынса ялыуҙар бик күп.

## Тин һумды һаҡлай

Торлаҡ-коммуналь хужалыҡта даими рәүештә реформа үткәрелеп тора. Ул иҫке йорттарҙы емереп, улар урынына яңыларын төҙөү, ә халыҡты яңы фатирҙарға күсереү һәм йорттарға капиталь ремонт үткәреү буйынса федераль программа нигеҙендә башҡарыла. Быны республика бюджетынан да, федераль бюджеттан да бер тапҡыр социаль проблемаларҙы хәл итергә бирелгән ярҙам, тип баһалайым мин. Унда инде, идара итеү формаһы ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, ҡатнашырға мөмкин, эшләргә теләгән генә булһын. Ошо мөмкинлектән файҙаланып, ғүмер буйы бараҡтарҙа, ятаҡтарҙа йәшәүселәр яңы фатирлы булды. Халыҡ мәнфәғәтендә эшләнгән реформа инде был. Дим районында, мәҫәлән, ошо юл менән күп йорттарҙы ремонтланылар.

Бөгөн иң мөһим мәсьәлә - энергияны һаҡлау. Беҙҙә берәй хәбәр сыҡһа, уны кампанияға әйләндереп ебәрергә яраталар. Хәҙер барыһы ла лампочкаларҙы алмаштыра башланы. Энергияны һаҡлау - ут ҡына түгел бит. Ул газ да, һыу ҙа, йылылыҡ та. Беҙҙең дүрт йортта ла һыу, йылылыҡ счетчиктары тора. Экономиялау иҫәбенә бөгөн йылытыуға һәм электроэнергияға, дөйөм йорт ихтыяжына сығымдарҙы кәметтек. Мәҫәлән, йылылыҡ хаҡының квадрат метрын 3,36 һумға кәметтек. Элек 14 һум түләйҙәр ине. Дөйөм йорт ихтыяжына быҒаса 24,36 һум ала инек, хәҙер 19 һумға ҡалдырҙыҡ. Әле лифттарҙа диодлы лампочкалар яна. Подъездарҙа датчиктар ҡуйылған. Кеше инә икән - лампочка яна, үтеп китһә - һүнә. Бер минут яна. Улар яңы лампочкалар. Хаҡын өс йылда ҡапларға тейеш ине, 60 процентын бер айҙа ҡапланы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бына шулай, эшләп ҡарап, хаталанып, тәжрибәләр үткәреп, торлаҡ милекселәре ширҡәте хеҙмәткәрҙәре, идара итеү системаһы нисек аталыуына ҡарамаҫтан, торлаҡ хужаларының аҡсаһын экономияларға, улар өсөн барлыҡ унайлыҡтар тыуҙырырға тырыша. Бары тик эшләнгәндә күрә белергә, тәртип һаҡларға ғына кәрәк. Юҡҡа ғына, таҙарткан урында түгел, ә сүпләмәгән урында таҙа, тимәйҙәр.**

Зәйтүнә САЛАУАТОВА.

ХОККЕЙ

# ӨҪТӘМӘ ВАҠЫТТА ҒЫНА ЕҢДЕЛӘР

**Континент хоккей лигаһында иң көслө командаларҙың береһе - "Металлург". Магнитогорск хоккейсылары чемпионатты һәр ваҡыт тиерлек көмөш, һис булмаһа, бронза миҙал менән тамамлай. "Металлург" яңы миҙгелде "Салауат Юлаев" кеүек үк уңышлы башланы.**

"Салауат Юлаев" үҙ майҙанында "Металлург" командаһын ҡабул итте. Матч һәр ике яҡтың көслө һөжүме менән башланды. Беренсе осор уртаһында ҡунаҡтарҙың иң мәргән уйынсыһы Денис Платонов майҙан хужалары ҡапҡаһы артында ҡыҙыл ут тоҡандырҙы. Был инде уйындың ҡаты, көсөргәнешле булыры тураһында етди иҫкәртеү ине. Юлаевсыларҙың беренсе осорҙа яуап шайбаһын индерә алмауы быны раҫланы.

Икенсе осор башланыу менән үк тиерлек юлаевсы Петр Счастливый иҫәпте тигеҙләне. Әммә бер нисә минут үттеме-юҡмы, ҡунаҡтар йәнә алға сыҡты. Ләкин оҙаҡҡа түгел. Олег Твердовский ҡунаҡтар ҡапҡаһына 3-сө шайбаны сәпәне. Артабан юлаевсы Александр Свитов майҙан хужаларын алға сығарҙы. Осор тамамланды, тигәндә, Д.Платонов һуҡҡан шайбаны юлаевсылар ҡапҡасыһы Александр Еременко тота алмай ҡалды. Бына һуңғы 2-се осор 3:3 иҫәбе менән тамамланды.

Өсөнсө осорҙа ла ҡыуып етеү, уҙып китеү уйыны дауам итте. Тәүҙә шул уҡ Денис Платонов 4-се шайбаны индерҙе, ә Андрей Кутейкин иҫәпте йәнә тигеҙләне. 5-се голды тәүҙә Д.Платонов индерҙе, Александр Радулов шулай уҡ 5-се шайбаны ҡунаҡтар ҡапҡаһында оялатты.

Төп уйын ваҡыты эсендә еңеүсе булманы. Уйын яҙмышы өҫтәмә ваҡытта хәл ителде. Еңеүле голдың авторы яңы уйынсы Якуб Клепиш булды.

Юлаевсылар көсөргәнешле, мауыҡтырғыс уйынды 6:5 иҫәбе менән тамамланы. Еңеү ҙур ауырлыҡ менән яуланды.

Юныс ӘХМӘҘИЕВ.



## ҺОРАУ - ЯУАП

### БОҘОҠ ТЕЛЕВИЗОР

**Яңыраҡ кредитҡа стенаға беркетелә торған телевизор һатып алдым, ләкин ул боҙоҡ булып сыҡты. Тәүҙә ауырып, уны магазинға кире алып бара алманым. Аҙаҡ барһам, миңә уны ремонтҡа бирергә ҡушалар. Бына хәҙер ике аҙна инде ремонтҡа биргәнемә, телевизорым һаман әҙер түгел, запас деталь юҡ, тиҙәр. Был тауарҙы яңыһына алыштырыуҙы талап итә аламмы?**

- "Ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау тураһында" Закон буйынса һеҙ дәғүә яҙа ала инегеҙ. Тәүҙә үк телевизорҙы йә алмаштырыуҙы, йә йүнәтеүгә биреүҙе һайлай ала инегеҙ. Ремонтҡа тапшырғас, көтөргә тура килә инде. Әгәр йүнәтә алмаһалар, һеҙгә яңы телевизор бирергә тейештәр. Гарантиялы ремонт ваҡыты - 45 көн.

### ҒҮМЕРЛЕК СТАТЬЯ

**РФ Енәйәт кодексының 158-се статьяһы буйынса бер танышымдың эше яҡтарҙың килешеүе менән тамамланды, хәҙер бөтәһе лә һәйбәт. Танышым юғары белемгә эйә. Яңыраҡ ул бер фирмаға өлкән кассир булып эшкә урынлашырға иткәйне, һуңғы моментта уны эшкә алыуҙан баш тарттылар, сөнки анкетаһы хәүефһеҙлек хеҙмәте аша үткәрелмәгән. Енәйәт статьяны тураһында мәғлүмәт күпме ваҡыт һаҡлана икән?**

- Дөрөҫ, быңдай статья буйынса яҡтарҙың килешеүе генә енәйәт ҡылыусыны аҡлай алмай. Эш биреүсе танышығыҙҙың хәлен аңлап (йәлләп, тигәндәй) эшкә алмаһа, уға, ғөмүмән, эре фирмаларға эшкә урынлашыуы бик ҡыйын буласаҡ. Бөтәһе лә етәксенән тора, әлбиттә. Ә инде танышығыҙҙың РФ Енәйәт кодексының 158-се статьяһы буйынса (урлау) яуапҡа тартылыуы хаҡындағы мәғлүмәт бер ҡасан да юҡҡа сығарылмаясаҡ.

### ГИПНОЗҒА БИРЕЛГӘНМЕ?

**Минең бер таныш ҡатындың ире тәүге никах менән йәшәгән саҡта казинола 500 мең һумға отолған. Уны түләү өсөн төрлө банктан кредит алды. Ҡатыны менән айырылышты ла хәҙер минең танышым менән никахтарын теркәмәйенсә йәшәйҙәр. Был ҡатын (ул шәхси эшҡыуар) әлеге ирҙең бурысын түләй, ике йыл эсендә 400 мең түләне. Түләмәһә, ире үлтерә яҙғансы туҡмай. Ул ир, моғайын, гипнозға һәләтлелер, юғиһә, ҡатын уға буйһонмаҫ ине. Уға нишләргә?**

- Был танышығыҙҙың туғандары барҙыр бит. Әгәр улар ҡатындың гипноз тәьҫирендә туҡмала-туҡмала кеше бурысын түләүен, үҙен тейешенсә һәм тәбиғи тотмауын, ғәҙәти булмаған тәртибен күрә икән, уның психик сәләмәтлеген тикшертеү өсөн медицина учреждениеһына мөрәжәғәт итһендәр. Ирҙең бурысын ҡатын түләргә тейеш түгел.

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## Ҡабаҡ



Ҡабаҡ файҙалы ла, тәнде лә таҙарта. Ҡабаҡтың өҫтөн ҡырҡып алып, эсен таҙартырға ла, бал менән тултырып, ҡамыр менән йәбештереп ҡуйырға. Бүлмәлә 10 көн тотҡас, шыйыҡсаһын бушатып алырға. Ашарға 40 минут самаһы ҡалғас, 1-әр ҡалаҡлап көнөнә 3 тапҡыр бөткәнсе эсергә. 20 көн ял иткәс, дауаны тағы ҡабатларға. Ҡабаҡ таҙа, өлгөрөп еткән булһын.

## Патиссон

Ашҡаҙаны сирле кешеләргә табип тарафынан йәшелсә-емештәр ашау тыйылмаған булһа, патиссон ҡулланыу эсәктәргә еңел тәьҫир итеп, уларҙың эшмәкәрлеген яҡшырта. Патиссонда, бигерәк тә ҡабығында, B2 витамины, микроэлементтар күп, шуға ла бәләкәйерәк патиссондарҙы ҡабығы менән турап бешереп ашау файҙалы. Ашҡаҙан сирҙәре киҫкенләшеп киткән осорҙа ла патиссон ашау дауаға ғына. Патиссон һимеҙлек, дисбактериоз булғанда, бауыр, бөйөр сирҙәренән файҙалы.

## Алоэ

5-6 тамсы алоэ һутын ярты стакан һыуға тамыҙып эсһәң, 5-6 көндә ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙары бөтә.

Ангина булғанда алоэ япрағын дүрткел итеп ҡырҡып алып, эсен ярып, көнөнә өс тапҡыр ашарҙан 20 минут алда тел аҫтында тотоп һурырға. Сәстәрҙе яҡшыртыу өсөн баш тиреһенә бармаҡтар менән ышҡып, алоэ һутын һөртөү яҡшы.

## Аҡ сәскә

Ауыр аштың йәки дарыуҙарҙың насар тәьҫиренән ашҡаҙан эшмәкәрлеге киҫкенләшеп китһә, 1 балғалаҡ аҡ сәскәне ҡайнар һыу менән бешекләп, 15-30 минут самаһы төнәткәс, ашар алдынан өстән бер өлөшөн эсергә. Сәскә кипмәгән булһа, саҡ ҡына күберәк алырға. 2-3 көн эсеү ҙә хәлде яҡшыртып ебәрә.

Флора БИКЕМБӘТОВА.

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ИВАН ЛЕПЕХИН СӘЙӘХӘТНАМӘҺЕ,

## йәки XVIII быуаттағы башҡорт донъяһына бер ҡараш

Яңы кейәүгә сыҡҡан башҡорт ҡатындары бик оялсан була, бигерәк тә сит-ят кешеләр йәиһә үҙҙәренән олораҡ яңы туған-тыумасаһы алдында. Был осраҡта улар һәр саҡта ла мөйөшкә боролоп, мөмкин булғанса йөҙҙәрен ҡапларға тырыша; ҡунаҡтар ултырышып бөтөп, тын ҡалғас, һәр береһен, беҙ алдараҡ яҙғанса, баш эйеп хөрмәтләй. Ололарға үҙҙәре башлап һүҙ ҡушмайҙар, мөйөшкә табан боролоп, тын ғына торалар. Бынан башҡа, башҡорт ҡатын-ҡыҙының яңы кейәүгә сыҡҡанын башында ҡашмау өҫтөнә уратып бәйләнгән төлкө йә башҡа төрлө малахайы булыуынан белеп була.

Башҡорттарҙың бала тыуыу һәм ерләү йолалары татарҙарҙыҡына оҡшаш; әммә бала тәрбиәләүҙә айырма күп. Башҡорттар балаларын грамотаға һирәк өйрәтә, шуның һөҙөмтәһендә уларҙа абыз вазифаһын, башлыса, Өфө һәм Ҡаҙан өйәҙенән килеүсе татарҙар башҡара. Бәләкәй малайҙарҙы иң тәүҙә уҡ атырға һәм атта һыбай йөрөргә өйрәтһәләр, ҡыҙҙар мал ҡарарға һәм ҡул эштәренә өйрәнә. Бала ҡарауҙың башҡа яҡтарын алғанда, вайымһыҙлыҡ һәм әрпешлек күп, шуға күрә бала-сағаның өҫ-башы бик ҡаралмай.

Башҡорттарҙа үҙҙәренең йәшәү рәүешенә ярашлы, бәпестәр өсөн ҡайын ҡайырыһынан, уны көймә йәки кәмәгә оҡшатып һалып, ян-яғынан тал сыбыҡтары менән нығытып, сәңгелдәктәр яһала. Сәңгелдәктең баш яғынан, бәпестең күкрәк тәңгәле тура килгән урында, ике ҡабырғанан тыштан һәм эске яҡтан ике элмәк үткәрелә. Аяҡ яғынан да шундай уҡ ике элмәк ҡуйыла. Сәңгелдәктән осоп төшмәһен өсөн ошо элмәктәр менән бәпесте күкрәгенән һәм аяҡтарынан бәйләп ҡуялар. Ҡабырғаға беркетелгән талға ҡайыш йәиһә билбау тағып, уны ҡулбаш аша кейәләр. Шулай итеп, һыбай китеп барыусы башҡорт ҡатыны үҙенең бәпесен бер хәүефһеҙ үҙе менән йөрөтә һәм имеҙә ала; ат һөрөнөп киткән саҡта, йәиһә башҡа бер кинәт һелкетеп ебәргән мәлдә бәйләп ҡуйылған бәпес сәңгелдәктән осоп төшмәй.

Башҡорт туйҙарының, ваҡытты бик күңелле итеп үткәреүҙән тыш, беҙгә башҡа файҙаһы ла булды. Оло башҡорт йыйыны беҙгә төрлө хәбәрҙәр еткерҙе, һәм беҙ бында улар араһынан бик шәп мәғдән сәнәғәтселәрен таптыҡ, ә уларҙың иң абруйлыһы, Үмәр Ямышев исемле Исәт провинцияһы кешеһе, башҡорттар араһында билдәле мәғдән эҙләүсе булараҡ танылыу тапҡан. Беҙ уның һәм уның иптәштәренең кәңәшен тотоп, ғәҙәттәге юлды ҡалдырып, һыбай килеш айырым юлға саҡтыҡ...

...Башҡорттарҙан айырылып киткәс, беҙ юлыбыҙҙы Урал буйлап дауам иттек, туҡтауһыҙ барған көслө ямғырҙар арҡаһында бәләкәй генә Урал йылғаларының да беҙҙең өсөн оло ҡаршылыҡҡа әүерелеүе ошо юлыбыҙҙа кисергән иң ҙур ҡыйынлыҡтар рәтендә булды. 10 саҡырымлап юл үткәс, Әй йылғаһына яҡынлаштыҡ, уның аръяғында оҙонлоғо 5 саҡырымға тиклем еткән, Үрәнге тип аталған (был атаманы автор "кленовый", тип тәржемәләй. - **Ред. иҫк.**), бигүк билдәһеҙ булмаған Урал арты һырты ята. Ошо һырттан Раҡы исемле бигүк бәләкәй булмаған йылғасыҡ ағып сығып, 10 саҡырымлап барғас, Әй йылғаһына ҡушыла. Ошо тауҙан 30 саҡырымдарҙа Йөрәк Таш (автор "гора сердце", тип өҫтәп ҡуя. - **Ред. иҫк.**) тип йөрөтөлгән икенсе бер билдәһеҙ булмаған Урал арты һырты күренә, ул һырт уртаһында түңәрәк ҡалҡыулыҡ булыу сәбәпле ошолай аталған. Ошо һырт итәгендә урамаһы 10 саҡырымлап тәшкил иткән киң күл күренә, унан Әй йылғаһына ҡойоусы шәп ағымлы Һатҡы йылғасығы ағып сыға. Үҙәнгүр тауы өсөнсө билдәле һырт булып, унан ағымының уң яғынан Әйгә ҡушылыусы Болҡағылыш һәм Тибис йылғасыҡтары ағып сыға. Ошо йылғасыҡтар араһындағы 2 саҡырымлап ерҙе Үрәнге тауына табан һуҙылған Ыштаныш күле биләй...

...Сәүелдер йылғасығы буйында ул саҡта Шөкөр исемле билдәле башҡорт байы йәйләй ине, һәм ул күңел асыу өсөн башҡорт мәжлесен уның бар булған күркәмлегендә ҡороу ниәтендә халыҡты йыйынға саҡырып йөрөгән мәлдә һис көтмәгән хәлгә тарып, бөтә әҙерлек мәшәҡәттәрен ҡалдырып торорға мәжбүр була. Уның 10 йәштәр тирәһендәге улы тирмәләр янында уйнап йөрөгән сағында ҡара йыланға баҫҡас, ул малайҙы саҡҡан. Ярты сәғәт тә үтмәне, уның аяғы самаһыҙ шешеп китте, ә йылан саҡҡан урыны шул тиклем нығ һыҙланы, ҡысҡыртмайынса, уның аяғын борҙороп та булмай ине. Ағарып киткән йөҙө, ҡараңғыланып киткән күҙҙәре һәм йыш-йыш тын алыуы уның ниндәй хәүефле хәлдә ҡалыуын асыҡтан-асыҡ күрһәтеп тора ине. Ошо саҡта мин табип вазифаһына инеп, малайға ярҙам итеү өсөн үҙемдең поход аптекаһын һәм аш-һыу ниғмәттәрен файҙаландым. Ағас майы йылан бальзамын алыштырһа, эстән дауалау өсөн осоусы тоҙ (аммиак тоҙон шулай атағандар. - **Ред. иҫк.**) ҡулланылды; әйтергә кәрәк, төн уҙыуға башҡорт малайы тыныслана бирҙе. Әйтелгән тартышыуҙары ла бер аҙ кәмене. Ошо осраҡтан файҙаланып, башҡорттарҙың йылан менән бәйле ҡайһы бер хөрәфәттәрен иҫкә алып китәм.

Әгәр башҡорт ошондай йыланды үлтерә икән, ҡайҙа һәм нисек кенә ашығып бармаһын, атынан төшөп, йыландың башын таяҡ менән ергә тыҡмайынса китмәй. Үҙҙәренә һәм малдарына килтергән зарары өсөн улар йылан үлтереүҙе мотлаҡ үтәлә торған ғәмәл, тип иҫәпләй; йыландың башын ергә тығыу уларҙың билдәле бер ҡараштары менән бәйле. Башҡорттар үлтерелгән йылан янына уның иптәштәре кешеләргә билдәле булмаған үлән тамырын килтереп, яраға һалыу менән йылан терелә икән, тип уйлай. Быны үҙ күҙҙәре менән күреүселәргә һылтанып, улар ошо тамыр бөтә сирҙәрҙе дауалауҙа барса табип сараларынан да һөҙөмтәлерәк булырға тейеш, тип уйлай.

Аттар өсөн ҡурҡыныс, тип иҫәпләнгән сир йоҡҡанда ла ҡара йылан дауалау сараһы итеп ҡулланыла. Был осраҡта йыландың башын киҫеп алалар; ул әле бөтөнләйгә тереклеген юғалтып өлгөргәнсе, йыландың ауыҙын ҡымтып тотоп, аттың яраһына һалалар; шунан һуң атты тиҙ генә һалҡын һыуға индереп, бәйләп ҡуйылған хәлдә уны ошонда бик нығ ҡалтырана башлағансы тоталар: улар әйтеүенсә, ошо ысул менән аттарҙы сирҙән бөтөнләйгә арындырып була...




...Кискә табан Әй буйында урынлашҡан Ҡыҙылбай (автор "Казылбаево" тип яҙа. - **Ред. иҫк.**) исемле башҡорт ауылына килеп еттек. Красноуфимскийҙың үҙенән ошо урынға тиклем иген үҫтереүселәр йәшәй, һәм улар ошо иркен ерҙәр менән тиккә генә файҙаланмай; Әй буйында йәшәүсе башҡорттар ҙа ҙур үҙгәреш кисергән. Үҙҙәренең күршеләре кеүек үк, улар ҙа бик яҡшы игенселәр. Уларҙың тауҙан атылып сыҡҡан шишмәләрендә он тарттырыусы ҙур ғына тирмән төҙөлгән. Уларҙың өйҙәрендәге таҙалыҡ мишәрҙәрҙекенән һәм башҡа яһаҡлы татарҙарҙыҡынан кәм түгел. Ашаған аҙыҡтары татарҙарҙыҡы кеүек; етешерәк йәшәгәндәренең йөҙөм эсемлектәре, сәй-ҡәһеүәләре лә бар.

Ер эшкәртеүгә өйрәнеү һәм тирмәләрҙә йәшәүҙән биҙеү уларҙы крәҫтиән тормошоноң ошо камилыраҡ кимәленә күтәргән. Башҡа башҡорттарҙыҡы кеүек, уларҙың да малдары күп, малсылыҡ өсөн иркен ерҙәрҙән торған оло йәйләүҙәре иген игеүгә лә, мал аҫрауға ла етерлек. Ошо ҙур булмаған башҡорт йәмғиәте үҙҙәренең ырыуҙаштарына ер эштәренә итәғәт итеү өсөн өлгө булып торһа ла, барса башҡорттарҙа ошондай тәртип урынлашыуын беҙ түгел, ейәндәребеҙ генә күрәсәк: сөнки бынан 15 саҡырымда ятҡан Һабанаҡ исемле башҡорт ауылында, шулай уҡ 20 саҡырым алыҫлыҡтағы Салйоғот, Мағазы, Ләмәҙ йылғасығы буйындағы Трөпкилде, Йыланыш йылғасығы буйындағы башҡорттар элеккесә вайымһыҙ йәшәүен дауам итә, ә уларҙың да һәр төрлө ауыл ҡоролошон үҫтереү мөмкинлектәре Ҡыҙылбай ауылында йәшәүсе башҡорттарҙыҡы кеүек үк бит: Әй йылғаһын һәр яҡтан урыны-урыны менән ҡалҡыулыҡтар менән айырылған мул һәм тигеҙ яландар уратып алған. Башҡорттар әлегә ер эшкәртеүгә битараф булһа, бесән сабыуға ла хәҙер шул тиклем нығ илтифат итә: оҙайлы ҡыш айҙарында малдар ҡалын ҡар менән ҡапланған үләнде һәр саҡта ла таба алмай, шуға улар хужаларының ашатыуына мохтаж. Башҡа урындарҙағына ҡарағанда, уларҙың бесән әҙерләү мөмкинлектәре күберәк, сөнки Урал буйы тигеҙлектәрендә, бигерәк тә уйһыу ерҙәрҙә үлән шул тиклем бейек үҫә, хатта унда йөрөгән аттар ҙа күренмәй. Башҡорттар бесән сабыу эшен бар ғаиләләре менән башҡара, унда ҡатын-ҡыҙ ҙа ҡатнаша; шулай уҡ ярҙамға башҡа кешеләр саҡырыла, йәғни ит бешереп, күп итеп ҡымыҙ алып, үҙҙәренең таныштарын бергә йыйып һыйлайҙар, ә улары һый өсөн хужаға бесән сабырға ярҙам итә (бында һүҙ өмә тураһында бара. - **Ред. иҫк.**). Барса Урал артында йәшәүселәрҙәге кеүек үк, башҡорттарҙа ла бесән сабыу өсөн көмрө салғы (горбуша) ҡулланыла. Ул ҡәҙимге салғынан байтаҡҡа тарыраҡ һәм ҡыҫҡараҡ булып, оҙон булмаған һапҡа беркетелә, һәм бесән сабыусы һәр һелтәгән һайын эйелергә мәжбүр була; шуға күрә бесән сабыу ҡыйыныраҡ та, файҙаһыҙыраҡ та: уның менән бар үләнде тамырынан сабып алып булмай, байтағы сабылмайынса тороп ҡала.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы бар).**

*ТАРИХЫНДАН ДАН ТАП!*



## "ПАРИЖДЫ ЛА КҮРҘЕК БЕҘ..."

Йәмғиәттә легендаларға "әкиәт" тип ҡарау йәшәп килһә лә, минеҫсә, улар башлыса ысынбарлыҡты сағылдыра. 1812 йылдың октябренән алып рус ғәскәрҙәре һөжүмгә күскәс, Башҡортостандан килгән атлы полктар Наполеондың хәрби көстәрен ҡамау һәм юҡ итеүҙә әүҙем ҡатнаша. Малоярославец районында 1-се типтәр полкы батырлыҡ күрһәтә һәм быны өсөн уның командиры майор Тимеров 4-се дәрәжә Изге Владимир ордены, ә прапорщик Монасипов менән заурЯд-хорунжа Ибраһимов 3-сө дәрәжә Изге Анна ордены менән бүләкләнә.

Өс башҡорт һәм Урал полкы генерал Витгенштейн корпусында була. Улар Петербургка барған дошмандың юлын быуа. 1812 йылдың нояберендә бер нисә башҡорт полкы Волга буйы ополчениеһы сафында Украинаны һаҡлай.

Дошманды эҙәрләп ҡыуғанда башҡорт һәм казактар бик ҡыйыу эш итә. Уларҙы йыш ҡына разведка яһау өсөн тәрән тылға ташлайҙар. Ырымбур Губернаторы Волконскийға рус ғәскәрҙәренең еңеү артынан еңеү яулауы һәм француздарҙың ҡасыуы хаҡында хәбәр иткәндә Кутузов былай ти: "Һеҙ күҙ алдына ла килтерә алмайһығыҙ. Ваше сиятельство, нисек итеп һәр рус һалдаты ҡасыусы дошманды туҡмап, кинәнес алғанын, батырлыҡ ҡылғанын. Шулай уҡ казактар һәм ҡайһы бер башҡорт полктарының уларҙы ҡырғанын!"

Башҡортостан яугирҙары рус ғәскәренең 1813-1814 йылдарҙағы сит илгә походында ла ҡатнашалар. 2 типтәр, 2 мишәр, ҡалмыҡ, Ырымбур, Урал казактары һәм күп кенә башҡорт полктары Беннигсен етәкселек иткән һәм Польша менән Германия ерендә һуғышҡан "Польша" ғәскәрҙәре сафына инә.

Варшаваны азат итеүҙә 2-се башҡорт полкы ҡатнаша, ә Данциг (Гданьск) ҡалаһын ҡамау һәм штурмлауҙа 8-се башҡорт, 2-се типтәр, ҡалмыҡ һәм Ырымбур казак полктары ҡатнаша. Шунда Изге Анна ордены менән бүләкләнгәндәр араһында Хөсәйен Күсәрбаев, Иҡсан Әбүбәкиров (икеһе лә икенсе тапҡыр. - **Авт.**), Ирназар Дәүләтсурин, Байбулат Торсонбаев, Иҫәнғол Ишҡужиндар була. Ә Ырымбур полкынан 14 яугирға хәрби орден тапшырыла.

1-се башҡорт полкы Берлин эргәһендәге һуғыштарҙа һәм уны алыуҙа ҡатнаша. 4-се башҡорт һәм 2-се мишәр полктары Глогау ҡәлғәһен ҡамап тота. Шулай уҡ 1-се, 4-се, 5-се, 9-сы һәм 14-се башҡорт полктары Лейпциг эргәһендәге "халыҡтар һуғышында" ҡатнаша. Наполеон генералы Марбо уҡты бик мәргән һәм оҫта атҡандары өсөн үҙҙәре үк "амурҙар" тип атаған башҡорт яугирҙары хаҡында тәҫораттарын яҙып ҡалдыра: "Улар беҙҙең ғәскәрҙе һәр саҡ һағалап ҡына торалар. Саҡ ҡына уңайы сығыу менән, һағыҙаҡ күсе кеүек ябырылалар. Ә уларҙы ҡыуып етеүе бик ҡыйын".

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**
**(Аҙағы).**

**✓ *Дәүләтша кантондың 30 балаһы (17 улы, 13 ҡыҙы) булған. Формуляр исемлектә уның өс ҡатыны теркәлгән, әммә төрлө йылдарҙағы ревизия мәғлүмәттәрендә уның башҡа ҡатындары хаҡында ла мәғлүмәттәр бар.***

# КЕМДӘР УЛАР

## Наполеонға ҡаршы бер полк ғәскәр

**Өс метр бейеклектәге, алты метр оҙонлоҡтағы стендҡа ҡуйылған шәжәрәне күргәнегеҙ бармы? Унда 3 меңдән ашыу кешенең исеме, йәшәгән йылдары, башҡарған ғәмәлдәре теркәлгән, ҡайһыларының фотолары урын алған. Күргәнегеҙ булмаһа, ул - 3-сө Башҡорт кантоны начальнигы, күренекле дәүләт эшмәкәре һәм дипломат Дәүләтша Бикмәтовтың нәҫел шәжәрәһе. Был шәжәрә Башҡортостан Республикаһы буйынса Шәжәрә конкурсында иң яҡшыһы тип табылып, I дәрәжәле Диплом менән бүләкләнде. Шәжәрә 1625 йылдан башлап хәҙерге көнгә тиклемге ваҡытты үҙ эсенә ала. Кантон үҙеге Дәүләтша кантондың тыуған яғы Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ районының Ҡорман ауылында урынлашҡан булған. Тарихтан билдәле булыуынса, был нәҫелгә ҡараған ир-аттар Батырша ихтилалында, Салауат яуында ҡатнашҡан. 1812 йылғы Ватан һуғышында ошо нәҫел йәшәгән 3-сө Башҡорт кантоны ғына Наполеонға ҡаршы бер полк ғәскәр ҡуя. Бикмәтовтар Беренсе Бөтә донъя һәм Бөйөк Ватан һуғышында ла ҡатнашып, ҡаһарманлыҡ күрһәтә. Хәҙерге көндә Дәүләтша кантон вариҫтары Силәбе, Ҡорған өлкәләрендә, Башҡортостандың Әбйәлил, Баймаҡ, Хәйбулла, Белорет, Күгәрсен райондарында, Өфө, Сибай, Учалы, Мәскәү, Санкт-Петрбург, Екатеринбург ҡалаларында, Эстонияла, Пермь крайында, Марий-Эль Республикаһында, Ҡаҙағстанда, Татарстанда, Төмәндә, Израилдә, Канадала, Германияла, Австрияла, АҠШ-та, Италияла һәм башҡа урындарҙа йәшәй.**

**Әлбиттә, беҙ һүҙ башында әйткән шәжәрә үҙенән-үҙе генә барлыҡҡа килмәгән. Дәүләтша кантондың бөгөнгө вариҫтары - Әбйәлил районынан Мират Әхмәт улы, Сибай ҡалаһынан - Ирек Ниғәмәт улы, Өфөнән Рәүеф Фәйзәни улы Бикмәтовтар үҙҙәренең данлыҡлы ата-олаталарының тарихын өйрәнә торғас, "Мииррауфи" ижтимағи фәнни-тикшеренеү ойошмаһы барлыҡҡа килтерә. Был хаҡта Мират һәм Ирек Бикмәтовтар менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**▸ Шундай данлыҡлы нәҫелгә ҡарауығыҙ хаҡында алдан белә инегеҙме, ғөмүмән, үҙегеҙҙең шәжәрәгеҙҙе ошолай киң юҫыҡта өйрәнеү идеяһы нисек тыуҙы?**

**Мират Әхмәт улы:** Беҙ Дәүләтша олатайыбыҙ хаҡында ишетеп кенә белә инек. 1994 йылда Ирек ҡустымдың юллауы буйынса билдәле тарихсы Әнүәр Әсфәндийәровтың ярҙамы менән БР Үҙәк Дәүләт тарихи архивынан олатайыбыҙ хаҡында 1842 йылда тултырылған "3-сө Башҡорт кантоны начальнигы, есаул Дәүләтша Сәйетйәғәфәр улы Бикмәтовтың хеҙмәте һәм ҡаҙанған абруйы хаҡында формуляр исемлек" (хәҙергесә әйткәндә - личное дело) документын табыуға өлгәштек. Унда Дәүләтша кантондың тормошо, ғаилә хәле, эшмәкәрлеге хаҡында барлыҡ мәғлүмәттәр бар. Бер аҙҙан Башҡортостан энциклопедияһының I томында ла Дәүләтша Бикмәтов хаҡында белешмә урын алды.

Былар барыһы ла беҙҙең артабанғы эҙләнеүҙәребеҙ өсөн этәргес көс булды һәм беҙ 2007 йылдың ҡышында Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районына сығып киттек. Кантон үҙеге булған Иҫке Ҡорман ауылы хәҙерге ваҡытта юҡ, Яңы Ҡорманға барып, Абдрафиҡ Бикмәтов тигән ағайҙы таптыҡ. Ул беҙгә Иҫке Ҡормандың ваҡытында 4 мәсетле ҙур ауыл булыуын һөйләне. 4 мәсеттең береһен Дәүләтша кантон һалдырған. Уны Аҡмәсет тип йөрөткәндәр. Ауыл Тенес йылғаһының ике ярында урынлашҡан булған. Бөгөн ул ауылдың тау итәгендәге зыяраты ғына бар. Сөнки 1957 йылда "Маяҡ" атом станцияһында шартлау булғас, ауылды икенсе урынға күсерҙеләр.

Артабан Силәбегә киттек, беҙгә унда Дәүләтша кантондың бүләсәре Бикмәтов Фәйзәни тигән кеше йәшәүе хаҡында әйттеләр. Унда барғансы беҙгә Фәйзәни туғаныбыҙҙың һәм уның Өфөлә йәшәүсе улы Рәүефтең бер нисә йыл Дәүләтша кантондың шәжәрәһе менән шөғөлләнеүен дә белдек. Баҡтиһаң, һөнәре буйынса инженер-төҙөүсе Рәүеф Дәүләтша кантондың шәжәрәһе буйынса 1625 йылдан башлап бик күп һандағы мәғлүмәт туплаған булған. Шуныһы ла бар, беҙ осрашҡансы Рәүеф Дәүләтша кантон шәжәрәһенең әлеге Башҡортостанға бәйле өлөшөн белмәгән булып сыҡты. Тамырыбыҙ бер булғас, уртаҡ телде тиҙ таптыҡ һәм беҙ өсәүләп, Ирек, Рәүеф һәм мин, Дәүләтша кантондың яңыртылған шәжәрә вариантын төҙөргә булдыҡ.

Дәүләтша кантондың 30 балаһы (17 улы, 13 ҡыҙы) булған. Формуляр исемлектә уның өс ҡатыны теркәлгән, әммә төрлө йылдарҙағы ревизия мәғлүмәттәрендә уның башҡа ҡатындары хаҡында ла мәғлүмәттәр бар. Ана шул 17 улының береһе - Хужахмәт Йәсәүи исемлеһе - минең олатай. Олатайым йәштән үк Аҡмулла, Зәйнулла ишан Рәсүлевтар менән таныш була. Зәйнулла Рәсүлевтың Троицкиҙағы мәҙрәсәһе Дәүләтша кантондың биләмәһендә урынлашҡас, улар иркен аралашып йәшәгән. Ә Аҡмулла менән олатайым Стәрлебаш мәҙрәсәһендә бергә уҡыған. XIX быуаттың икенсе яртыһында йәҙитселек буйынса уҡытыу башланғас, Хужахмәт олатайым 1884 йылда Орск өйәҙенең Хәлил ауылына (хәҙерге Әбйәлил районы) ошо типтағы мәктәп асырға килә.

Мәктәп өс бүлмәнән тора. Ике класс бүлмәһе һәм ашхана. Зәйнулла Рәсүлев тәҡдиме менән олатайым үҙе менән дүрт уҡытыусы алып килә. Улар араһынан Камил Мусин данлыҡлы уҡытыусы булып китә. Быны шулай итеп Дәүләтша Бикмәтов нәҫеле Әбйәлил ерлегенә ялғана.

Ни өсөн олатайыма мулла Хужахмәт Йәсәүи исемен биргән һуң? Быныӊ ни өсөн шулай икәнлеген хатта атайым да аңлата алмағайны. Белеүебеҙсә, XII быуатта йәшәүсе Хужахмәт Йәсәүи суфыйсылыҡ шиғриәтенә нигеҙ һалған кеше. Ҡаҙаҡтар уны әүлиә дәрәжәһенә күтәргән, Ҡаҙағстандың Төркөстан ҡалаһында Хужахмәт Йәсәүиҙең мавзолейы лә бар. Әгәр ҙә Дәүләтша кантон 17 улының араһынан тап уға бөйөк суфый шағирының исемен биргән икән, тимәк, уға тыумыштан әүлиәләргә хас сифаттарҙың бирелеүен дә белгән, тигән һүҙ.



**Ирек Ниғәмәт улы:** Хужахмәт Йәсәүиҙең улы Һибәтулла минең олатай була. Уның тәүге ҡатыны Тутыйғош өләсәй Әбйәлил районының Орсоҡ ауылынан, унан минең атай Ниғмәтулла тыуа. Өләсәйем үлгәс, олатайым Баймаҡ районынан ҡатын ала. Атайым Ниғмәтуллаға 9 йәш булғанда Һибәтулла олатайым да үлеп китә. Шунан атайым Темәс ауылында революциянан һуң кантон тәфтишсеһе булып эшләүсе атаһының ҡустыһы Әхмәтшәриф Бикмәтовҡа килеп һыйына. Атайым үҙе менән олатайҙың икенсе ҡатынынан тыуған ике ҡарындашын да әйәртеп алып бара. Темәстә атайым күсер булып эшләй башлай, аҙаҡтан беренсе комсомол булып китә, партияға инә. Ул саҡта Темәстә ике колхоз булып, шуның береһендә рәйес урынбаҫары булып эшләй атайым. Темәстә Мәмбәтҡолова Шәмсиямал Мәжәүир ҡыҙына өйләнә. Аҙаҡ ул Түбәлә, Икенсе Этколда (мин шул ауылда тыуҙым), Йылайыр совхозында эшләй. Һуғыш башланғас уны Ниғмәт (Үрнәк) ауылы колхозына рәйес итеп ҡуялар. Һуңынан ул колхозды минә лә етәкләргә тура килде.

***Пушкин "Капитанская дочка" әҫәрен яҙған саҡта Ырымбурға Перовскийға килә. Ә Перовский менән Дәүләтша кантон бик яҡшы таныш булған, улар хат алышып торған. Перовский есаул Бикмәтовтың балаларын кадет корпусына урынлаштырыуҙы талап итеп хат яҙа. Шулай итеп, Пугачев һуғышы тарихын өйрәнергә килеүсе Пушкин 3-сө кантон биләмәһен урап үтмәгәндер, тием. Сөнки кантонлыҡҡа ҡараған 220 ауылдың барыһы ла Пугачев яуында ҡатнашҡан. Тимәк, Дәүләтша кантон Пушкин менән дә осрашҡандыр, тип уйлайым.***

Бикмәтовтарҙың Баймаҡ яғына килеүенең яҡынса тарихы ошолай. Беҙ элек-электән Дәүләтша кантон олатай хаҡында, уның Ҡорман тигән ауылда йәшәүе хаҡында белә инек. Әлбиттә, Арғаяшта ла Ҡорман ауылы барлығын белгәс, беҙ башта аптыраштыҡ. Уйға ҡалдыҡ: Дәүләтша кантондың бер балаһынан бына беҙ таралғанбыҙ, ә бит уның тағы ла 29 балаһы булған. Әйҙә, шуларын да эҙләйек, тип, Мират ағай, мин, өлкән улым Азат мәрхүм өсәүләп февраль буранында Ҡоншаҡ яғына сығып киттек инде.

**▸ Дәүләтша кантондың барлыҡ балаларынан таралған нәҫел нисә кешене тәшкил итә бөгөн? Һанағанығыҙ бармы?**

**Мират Әхмәт улы:** Хәҙерге көнгә беҙ эҙләп тапҡандары ғына 3013 кеше. Уларҙың иң күбеһе Бикмәтов фамилияһын йөртә. Бынан тыш, Шәриповтар, Тимерғазиндар, Мәтиновтар, Лоҡмановтар, Ғәйнуллиндар, Вәлиуллиндар бар. 1937 йылда репрессиянан һаҡланыу өсөн дә ҡайһы бер Бикмәтовтар фамилияларын үҙгәрткән. Беҙ гәзиттәр аша Дәүләтша кантондың нәҫеленән булған кешеләрҙе бер туҡтауһыҙ эҙләйбеҙ. Силәбе өлкәһенән Тәфтиев фамилиялы бер кеше беҙҙең мөрәжәғәткә яуап бирҙе. Ул Дәүләтша кантондың әсәһе яғынан беҙҙең туған булып сыҡты. Беҙҙең фамилия 1695 йылдан башлап Бикмөхәмәт олатайҙан килә.

**Ирек Ниғәмәт улы:** Бикмөхәмәт ҡыҫҡартылып Бикмәт булып киткән. Өс быуаттан алып Бикмәтов фамилияһының юғалмай дауам итеүе сәбәбе Дәүләтша олатайыбыҙҙың тарханлыҡ дәрәжәһенән килә. Ғәҙәттә, ул заманда ревизия үткәреүселәр атаһының исемен улына фамилия итеп биргән. Әйтәйек, Юлай Аҙналин, Салауат Юлаев. Ә тархан вариҫтарына иһә тархандың фамилияһын үҙгәрешһеҙ яҙып килгәндәр.

**▸ Ә бына һеҙҙең нәҫелдән "Мииррауфи" ижтимағи фәнни-тикшеренеү ойошмаһын төҙөү идеяһы нисек тыуҙы? Ойошма үҙ алдына ниндәй маҡсаттар ҡуйып эш итә?**

**Мират Әхмәт улы:** Ҙур эшкә тотонғас, ижтимағи ойошма булдырыу ихтыяжы ла үҙенән-үҙе барлыҡҡа килде. Миндә башта ижтимағи академия төҙөү уйы тыуғайны. Был теләгемде телефон аша Ирек ҡустыма еткерҙем. Ул идеямды хупланы, тик "академия" һүҙенең яуаплылығы хаҡында ла белдерҙе һәм уның урынына "ижтимағи фәнни-тикшеренеү ойошмаһы" тигән тәҡдимде индерҙе. Артабан ойошманың исеме лә кәрәк булғас, Мират, Ирек, Рәуеф исемдәрен ҡушып, "Мииррауфи" тигән һүҙ килеп сыҡты. Бында беҙ "Кукрыниксы" төркөмө төҙәгән совет карикатурасылары Куприянов, Крылов, Соколов триоһы өлгөһөнә таяндыҡ.

***✓ Донъя буйынса таралышҡан туғандар, зат-нәҫелдәр бер-береһен табырға тейеш. Беҙ бөгөн "Көслө региондар - көслө Рәсәй", тибеҙ, шуның һымаҡ, "Көслө зат-нәҫелдәр булһа, милләт тә көслө була".***

# БИКМӘТОВТАР?

## ҡуйған Бикмәтовтар улар!

Беҙҙең төп маҡсат - Дәүләтша кантон нәҫеленә ҡараған барлыҡ туғандарыбыҙҙы табыу, асыу, уларҙың эшмәкәрлеген бер йүнәлештә ойоштороу. Шул уҡ Дәүләтша кантонды ғына алайыҡ. Ул 3-сө Башҡорт кантонының начальнигы ғына түгел, үҙ заманының күренекле дәүләт эшмәкәре, дипломат дәрәжәһенә күтәрелгән шәхес булған. Ул 30 йылға яҡын кантон начальнигы булып торған. 1831 йылда Рәсәй батшаһы кантон системаһын бөтөрөп, башҡорттарҙы крепостной итергә ниәтләнеп, был ниәтен 1-се, 2-се, 3-сө кантондарҙан башлап бойомға ашырмаҡсы була. Өс кантондан дүртәр вәкил ошо кантондарға попечитель булып торған Дәүләтша кантон етәкселегендә Санкт-Петрбургҡа юл тота. Теркәлгән мәғлүмәттәр буйынса, улар ошо юлда 13 ай йөрөп ҡайта. Улар батша менән осрашып, үҙенең кантонлығында ғына түгел, ғөмүмән, бөтә башҡорттарҙың аҫаба һәм дини хоҡуғын һаҡлап ҡалыуға өлгәшә. Ошо ваҡиғанан һуң кантон системаһы тағы ла утыҙ дүрт йыл дауам итә. Дәүләтша кантондың, дәүләт эшмәкәре булараҡ, башҡорт халҡы мәнфәғәте өсөн башҡарған төп ғәмәле ошо сәйәхәткә ҡайтып ҡала. Был хаҡта әле рәсми тарихта бер ниндәй ҙә мәғлүмәт уҡығаным булманы. Дәүләтша кантон начальник булараҡ үҙ вазифаһын намыҫ менән үтәгән. Уға Рәсәй батшаһы һәм губернатор тарафынан 9 тапҡыр "Благодарность" бирелгән. Хужалыҡ эшен ойоштороу йәһәтенән дә олатайыбыҙ бик күп эштәр башҡарған. Уға тиклем башҡорттар, асылда, малсылыҡ менән шөғөлләнгән. Дәүләтша кантон ер эшкәртеүгә лә ҙур иғтибар биргән. Иген үҫтерә башлағандар, айырыуса йәшелсәселек, тамыраҙыҡтар үҫтереү менән шөғөлләнгәндәр. Мәҫәлән, картуф үҫтереү буйынса Дәүләтша кантон барлыҡ кантондар араһында 1-се урынға сыҡҡан. Хәҙерге ваҡытта ла элекке Дәүләтша кантон биләмәһенә ҡараған ауылдарҙа йәшелсәселеккә һәм картуф үҫтереүгә иғтибар күп бүленә. Быйыл улар картуф үҫтереү буйынса Рәсәй Федерацияһының 100 иң яҡшы хужалыҡтары исемлегендә. Тарихи документтарҙан күренеүенсә, йорт-ҡураны, ауылдарҙы йыһазландырыу буйынса ла 3-сө кантон башҡа башҡорт кантондарынан айырылып торған. Демографик яҡҡа килгәндә инде, кантон башлығының үҙенең генә 30 балаһы булған. Уның бер ағаһының да шунсама балаһы барлығы теркәлгән. Шәжәрә буйынса ла Бикмәтов шәжәрәһенә ҡараусыларҙың күбеһендә 10-15-20 балаһы булғанлығын күрергә була. Кантон системаһы ваҡытында Дәүләтша кантон биләмәһендәге 500-гә яҡын кешенең барыһы ла офицер чинында булған. Улар Рәсәйҙең көньяҡ сик буйын тотоп торған. Беҙгә фамилия биреүсе Бикмөхәмәт олатайҙың иң өлкән улының исеме Яуғазы, икенсеһе Тимерғазы булған. Билдәле башҡорт геологы Ҡадир Тимерғазин да беҙҙең нәҫел кешеһе булыуы ихтимал. Был фактты ныҡлап тикшерергә кәрәк әле беҙгә. Тағы бер фараз. Пушкин "Капитанская дочка" әҫәрен яҙған саҡта Ырымбурға Перовскийға килә. Ә Перовский менән Дәүләтша кантон бик яҡшы таныш булған, улар хат алышып торған. Перовский есаул Бикмәтовтың балаларын кадет корпусына урынлаштырыуҙы талап итеп хат яҙа. Шулай итеп, Пугачев һуғышы тарихын өйрәнергә килеүсе Пушкин 3-сө кантон биләмәһен урап үтмәгәндер, тием. Сөнки кантонлыҡҡа ҡараған 220 ауылдың барыһы ла Пугачев яуында ҡатнашҡан. Тимәк, Дәүләтша кантон Пушкин менән дә осрашҡандыр, тип уйлайым. Ул кантон биләмәһендә Звериноголовская һ.б. ҡәлғәләр булған. Әҫәрҙә яҙылған ваҡиғалар шуларҙың береһендә булыуы ихтимал 1812 йылда 3-сө кантон Наполеонға ҡаршы тотош полк төҙөп ебәрә. Әгәр ҙә кантон нәҫеленә ҡараған 500-ләп хәрби кешенең арыуыҡ өлөшө офицер чинында булыуын иҫәпкә алһаҡ, полктың төп өлөшөн ошо нәҫел яугирҙәре тәшкил иткәненә инанырға була.

**Ирек Ниғәмәт улы:** Бикмәтовтар нәҫеленең тәүге ойоштороу съезын Баймаҡта үткәрҙек. Барлығы 230 кеше йыйылып, шуларҙан 45 кеше Силәбе өлкәһенән килде. Бынан тыш, съезға Дәүләтша кантондың вариҫтары Эстониянан, Пермь крайынан, Марий-Эль Республикаһынан, Ҡаҙағстандан, Татарстандан, Төмәндән килде. Ойошманың положениеһын әҙерләнек. Тәүҙә ойошманы барлыҡҡа килтереү мәсьәләһен, уның положениеһын, йыллыҡ планын йыйындан раҫлаттыҡ.

Дәүләтша олатайҙың эшмәкәрлегенә килгәндә, уның һәр эштең мөһимлеген аңлап, урын-еренә еткереп башҡарыу таланты һоҡландыра. Ул хатта 800 һумға кантондың архивын да төҙҙөрткән. Әнүәр ағай Әсфәндийәров әйтеүе буйынса, архив материалдарының иң яҡшы һаҡланған урыны ла 3-сө кантонда булған. Шуның өсөн дә уның Башҡортостанда кантон системаһы идаралығы тураһындағы китабында иң күп мәғлүмәттәр ҙә 3-сө кантон буйынса килтерелә.

Был ойошманы төҙөүебеҙҙең төп маҡсаты - үҙебеҙҙән һуң килгән быуынға мираҫ ҡалдырыу. Беҙ был донъянан китһәк, был эшкә берәү ҙә тотонмаҫ һымаҡ. Ни өсөн тигәндә, заманды үҙегеҙ беләһегеҙ, кешелек бөтөнләй башҡа маҡсаттар менән йәшәй. Дәүләтша кантон образы өҫтөндә ныҡышмалы эшләүебеҙҙең дә үҙ маҡсаты бар: хәҙерге йәш кешенең йөрәген уятыр, үҙен ҡуҙғатыр өсөн уның ошондай һоҡландырғыс олатаһы, фиҙаҡәр атаһы булыуы фарыз. Булған һәм бар бит беҙҙең ана шул образға тиң булыр олатайыбыҙ - атаҡлы Дәүләтша кантон. Беҙ бөгөн Дәүләтша кантон олатайыбыҙҙы күтәреп, башҡа нәҫелдәштәребеҙҙе ошо шәхес образы тирәһенә йыябыҙ. Бер кемгә лә сер түгел: хәҙер бер нәмә менән дә ҡыҙыҡһынмаған кешеләр, ғаиләләр күбәйҙе. Уларға тарих бар ни ҙә, юҡ ни.

**Мират Әхмәт улы:** Аҡһаҡалдар ҡоро рәйесе итеп - мине, ойошманың "Ижтимағи фәнни-тикшеренеү үҙәге" президенты итеп - Ирек ҡустыны, ғилми секретары итеп Рәүеф ҡустыны һайланылар. Ойошманың нәшер эштәре буйынса ла мөхәррире булып мин эшләйем. Былардан тыш, беҙҙең ойошманың почетлы ағзалары ла бар. Улар араһында фән докторҙары, профессорҙар, доценттар, кандидаттар етерлек. Беҙҙең нәҫелгә ҡараған Абдулхаҡ Бикмәтов, мәҫәлән, һуғыштан алда Башҡорт АССР-ының Күмер һәм аҙыҡ-түлек сәнәғәте наркомы булып эшләгән.

Быйыл Хәлилдә киң йәмәғәтселек вәкилдәрен йәлеп итеп, фәнни-ғәмәли конференция үткәрҙек. Конференцияны Хужахмәт Йәсәүиҙең тыуыуына 180 йыл тулыуға һәм Уҡытыусылар йылына бағышланыҡ. Хәлил урта мәктәбендә Хужахмәт Йәсәүигә таҡтаташ астыҡ. Конференцияла Хужахмәт Йәсәүи исемендәге премияны ла тапшырҙыҡ. Положение буйынса премия Хәлил ауыл хакимиәтенә ҡараған өс урта мәктәп уҡытыусыларына ике йылға бер тапҡыр бирелә. Киләсәктә был премияны Әбйәлил районы буйынса ла бирә башлаясаҡбыҙ.

**▸ Зат институтын тергеҙеүҙең тарихты өйрәнеүҙән тыш, милләтте ойоштороу буйынса әһәмиәтен ниҙә күрәһегеҙ? Нисек кенә тиеп әйтмәһендәр, беҙҙең милләт туғанлыҡ менән көслө. Хәҙерге заманда иһә шул тиклем тарҡаубыҙ, хатта ҡайһы берәүҙәр бер туғандарын һуңғы юлға оҙатырға ла бармай, хатта аталарына, үҙенән өлкән туғандарына ҡул күтәреүселәр ҙә юҡ түгел...**

**Мират Әхмәт улы:** Йомғаҡлау конференцияһында сығыш яһаған саҡта: "Нимәгә кәрәк ул беҙгә шәжәрә байрамдары? Беҙ бит был юл менән милләтте тарҡатабыҙ", - тип залдан берәү ҡысҡырҙы. Мин уға: "Киреһенсә, беҙ үҙебеҙҙең нәҫел тамырын нығыраҡ өйрәнһәк, күберәк нәҫелдәштәребеҙҙе тапһаҡ, бының менән милләтебеҙҙе нығытасаҡбыҙ ғына", - тип яуап бирҙем. Шәжәрәбеҙҙе төҙөгәс, күптәр миңә: "Мират ағай, һеҙҙең нәҫел бигерәк төплө икән. Беҙ һеҙҙе райком работнигы булараҡ ҡына белә инек, шундай нәҫелдәштәрегеҙ барлығын башыбыҙға ла килтермәгәйнек", - тип һоҡланыуын белдерҙе. Зат институтын тергеҙеүҙең төп маҡсаты, минеңсә, милләтте бергә туплауға, ойоштороуға алып киләсәк. Милләтте туплар өсөн иң тәүҙә уның һәр ағзаһын барларға, бының өсөн тамырҙарын юлларға кәрәк. Бының өсөн иң тәүҙә донъя буйынса таралышҡан туғандар, зат-нәҫелдәр бер-береһен табырға тейеш. Беҙ бөгөн "Көслө региондар - көслө Рәсәй", тибеҙ, шуның һымаҡ, "Көслө зат-нәҫелдәр булһа, милләт тә көслө була".

**Ирек Ниғәмәт улы:** Мират ағай - беҙҙең идеолог, Рәүеф - идеяны ҡағыҙға төшөрөүсе, ә мин шул уларҙы тормошҡа ашырыр өсөн ғәмәли эштәр менән булышам. Мәҫәлән, беҙҙең нәҫелдең тәүге йыйынын ҡайҙа үткәреү мәсьәләһе килеп сыҡты. Мират ағай йәшәгән Әбйәлил районында ғына Дәүләтша кантондың нәҫеленә ҡараған төрлө фамилиялы 800-ләп, Сибайҙа, Баймаҡ районында беҙҙең нәҫелгә ҡараған 20 ғаилә йәшәй. Логика буйынса беҙҙең тәүге йыйын Әбйәлилдә үтергә тейеш ине, әммә беҙ уны Баймаҡта уҙғарырға булдыҡ. Эште план төҙөүҙән башланыҡ. Һәр осрашҡан һайын планға пункттар өҫтәлә барҙы. Үткәреү урыны итеп күп туғандарыбыҙ уҡыған Баймаҡ ҡалаһының 2-се мәктәбен һайланыҡ. Саҡырыуҙар ебәрер алдынан нәҫелдәштәребеҙ йәшәгән һәр урында яуаплы кеше тәғәйенләп, туғандарыбыҙҙы йыйынға килтереү мәсьәләһен улар аша хәл иттек. Тәүге йыйынға әҙерлек барышында Баймаҡ ҡалаһында йәшәүсе Бикмәтовтарҙың барыһының да йортонда ремонт үткәрҙек, аҡсалары булмағандар кредит алды.

Тәүге йыйын бик юғары кимәлдә булды. Делегаттарҙы ҡаршы алыу, урынлаштырыу, ҡунаҡ итеү мәсьәләләре заманса юғарылыҡта үтте. Бигерәк тә йәштәр әүҙемлек күрһәтте, улар хатта төнгө дежурство ойоштороҙо. Төрлө урындарҙан килгән Дәүләтша кантон нәҫелдәре бер-береһен тапты был йыйында, хәҙер йәштәр күберәген Интернет селтәре аша аралаша. Йәйлап ҡына бер-беребеҙгә ярҙам да итешә башланыҡ.

**Мират Әхмәт улы:** Баймаҡта, Әбйәлилдә нәҫел йыйындарыбыҙ бик ойошҡан рәүештә үтте. Ә бына Ҡоншаҡ районында беҙҙең йыйынды ойоштороу ауырға төштө. Хатта Дәүләтша кантон иҫтәлегенә обелискты ла, тәүҙә уйлағаныбыҙса, район үҙәгенә ҡуя алманыҡ. Киләһе йыл Дәүләтша кантондың тыуыуына 220 йыл тула. Был сараны Силәбе өлкәһенең Арғаяш районында үткәрергә иҫәп тотабыҙ. Был хаҡта унда йәшәүсе Бикмәтовтар һорай.

**▸ Зәйнулла ишан Рәсүлев Ислам диненең тәриҡәт-суфыйсылыҡ юлына таянып, милләтебеҙҙең йөрәген уятыу, уны туплау юлына ирешкән. Ә бына һеҙҙең "Миирруфи" ойошмаһының дингә мөнәсәбәте нисек?**

**Мират Әхмәт улы:** Беҙҙең нәҫелдең ғаилә тәрбиәһендә суфыйсылыҡ ҙур роль уйнаған һәм беҙҙең нәҫелдәге дини кешеләр барыһы ла суфыйҙар булған. Уларҙы хатта власҡа ҡарата протест белдереүселәр тип тә атағандар. Беҙҙең затта ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы баш күтәреү инстинкт кимәлендә нығынған. Беҙҙең нәҫелдә яңыса белем алыуға ла ынтылыш ҙур булған. Олатайыбыҙ Хужахмәт Йәсәүиҙең Хәлилгә килеп йәҙитселек буйынса мәктәп асыуы ла бының дәлиле. Шәжәрәбеҙҙең Хужахмәт Йәсәүи тармағынан ғына 105 мөғәллим, уҡытыусы, тәрбиәсе килеп сыҡҡан, уларҙың дөйөм педагогик стажы 1700 йылға тиң. Бына минең атай совет осоронда ла юрист, тәфтишсе булып эшләгән. Баҡтиһәң, ул белем алған "Рәсүлиә" мәҙрәсәһендә юриспруденция уҡытылған икән.

**(Дауамы 10-сы биттә).**

***Өс кантондан дүртәр вәкил ошо кантондарға попечитель булып торған Дәүләтша кантон етәкселегендә Санкт-Петрбургҡа юл тота. Теркәлгән мәғлүмәттәр буйынса, улар ошо юлда 13 ай йөрөп ҡайта. Улар батша менән осрашып, үҙенең кантонлығында ғына түгел, ғөмүмән, бөтә башҡорттарҙың аҫаба һәм дини хоҡуғын һаҡлап ҡалыуға өлгәшә. Ошо ваҡиғанан һуң кантон системаһы тағы ла утыҙ дүрт йыл дауам итә. Дәүләтша кантондың, дәүләт эшмәкәре булараҡ, башҡорт халҡы мәнфәғәте өсөн башҡарған төп ғәмәле ошо сәйәхәткә ҡайтып ҡала.***

**✓ Кем белә, бәлки, ошо юл менән киләсәктәге башҡорт ауылының модулен дә барлыҡҡа килтереп булыр. Минеңсә, әгәр ҙә аймаҡ нәҫелдең йәшәү сығанағына һәм рәүешенә әйләнһә, был идеяның киләсәге буласаҡ.**

(Башы 8-9 биттәрҙә).

**Һеҙҙең зат-нәҫел араһында кесенең өлкәнгә буйһоноуы, өлкәндең кесегә ихтирамы (иерархия) мәсьәләһе нисек хәл ителә?**

**Ирек Ниғәмәт улы:** Элек-электән зат-нәҫел институты һаҡланған саҡта аҡһаҡалдың ихтыяры туғандар араһында ҡанун булып иҫәпләнгән һәм кеселәр ололарға һис һүҙһеҙ буйһонған. Ул саҡта милләт эсендә тәртип тә ҡаты булған. Эште башлаған саҡта беҙ ҙә был йәһәттән ауырлыҡтарға юлыҡтыҡ, әммә яйлап теҙгенде ҡулға алыуға өлгәштек, тип уйлайым, йәғни беҙ хәҙер үҙебеҙҙең нәҫелгә ҡараған барлыҡ туғандарыбыҙҙың тормошон контролдә тотабыҙ. Әлбиттә, эскелеккә һәм башҡа төрлө донъяуи проблемаларға бәйле мәсьәләләр етерлек, әммә улар хәл итерлек.

**Мират Әхмәт улы:** Әлбиттә, беҙ нәҫелебеҙгә ҡараған һәр кеше менән айырым-айырым эшләй алмайбыҙ, быға ваҡытыбыҙ ҙа етмәҫ ине. Шулай ҙа беҙ был эште урындарҙан яуаплы туғандарыбыҙға аңлатыу юлы менән алып барабыҙ. Улар үҙ нәүбәтендә үҙ даирәһендәге яуаплыларға, улары иһә тағы ла башҡаларға аңлата, йәғни беҙҙең ойошмала иерархия мәсьәләһе "баҫҡыс принцибы" буйынса тормошҡа ашырыла. 17 кешенән торған аҡһаҡалдар ҡоро был эште үҙ ҡулына алды.

**Ирек Ниғәмәт улы:** Элек ҡыҙ-ҡатындарҙы шәжәрәгә индермәгәндәр, сөнки шәжәрә менән ергә хоҡуҡ мөнәсәбәте лә нығытылған. Хәҙерге шәжәрәлә бындай хоҡуҡ юҡ, шуға күрә беҙ үҙебеҙҙең шәжәрәгә ҡыҙ-ҡатындарыбыҙҙы ла индерҙек һәм бының менән оттоҡ ҡына, тип уйлайбыҙ, сөнки улар араһында әүҙемлек көслөрәк. Беҙ нимәлер эшләнек, тип, үҙ-үҙебеҙҙе тынысландырып, бер урында туҡталып ҡалһаҡ, һүнеп ҡалыуыбыҙ ҙа бар. Шуға күрә Арғаяшта йыйын үткәргәндән һуң Әбйәлилдә "Зилкамал инәйҙең өләсәй культы" тибындағы саралар проектын башларға иҫәп тотабыҙ. Үҙенең биш балаһына юғары кимәлдәге тәрбиә биргән был шәхесте төрлө яҡлап өйрәнеп, үҙебеҙҙең нәҫел балаларын тәрбиәләүҙә файҙаланһаҡ, бер юлы "ике ҡуянды" атырбыҙ, тип уйлайбыҙ. Ҡуяндарҙың береһе - тарихты өйрәнеү булһа, икенсеһе - тәрбиә мәсьәләһен хәл итеү.

**Киләсәктә Бикмәтовтарҙың үҙ эшен ойоштороу, предприятие йә корпорация төҙөү күҙ уңында тотоламы? Әйтәйек, был идеяны Бикмәт ауылы йә аймағы рәүешендә күҙ алдына килтереп булмаймы? Тыуған төйәгебеҙҙә юҡҡа сыҡҡан ауылдарҙың ташландыҡ урындары бихисап бит…**

**Ирек Ниғәмәт улы:** Тарихты өйрәнеү, туғандарҙы барлау - бер нәмә, әммә бергәләп донъя көтөү мәсьәләһе тағы ла ҙурыраҡ ныҡышмалыҡ талап итәсәк. Мин йыш ҡына сит ил фермерҙарының эш тәжрибәһенә иғтибар итәм. Уларҙа, мәҫәлән, иген үҫтереүсе кеше - һөт менән йәшелсәне, һөт етештереүсе иген менән йәшелсәне башҡаларҙан һатып ала. Уның ҡарауы, ниндәйҙер йүнәлеш алыусы үҙ эшен яҡшы башҡара. Ә беҙ иһә ауыл ерендә бөтә нәмә менән шөғөлләнәбеҙ, игенен дә, картуфын да, йәшелсә-емешен дә үҫтерәбеҙ, һөт тә етештерәбеҙ һәм һөҙөмтәлә төрлө өлөштәргә бүленеп-сәселеп ҡаңғырабыҙ. Етмәһә, беҙҙең етештергән продукцияны һатып алыусы ла юҡ. Шуға күрә, төрлө йүнәлештә махсуслашҡан яңы Бикмәт ауылы йә аймағы хаҡында һүҙ йөрөтөргә булалыр. Аймаҡта бер нисә ғаилә йәшәй, уларҙың һәр ҡайһыһы ниндәйҙер продукция (иген, йәшелсә, емеш-еләк, тамыраҙыҡтар, бал, көнкүреш кәрәк-яраҡтары етештереү, аймаҡ МТС-ы, һ.б.) етештереү менән шөғөлләнә. Аймаҡтың үҙ баҙары һәм ҙур ҡалаларҙа магазиндары була. Ныҡлап күңел һалып тотонһаң, был идеяны тормошҡа ашырырға була. Бының өсөн иң тәүҙә урындағы хакимиәт менән уртаҡ тел табыу кәрәк. Беҙ кемдән кәмбеҙ. Әйтәйек, Ставрополь, Краснодар крайҙарында казактар был эште башлаған да инде. Кем белә, бәлки, ошо юл менән киләсәктәге башҡорт ауылының модулен дә барлыҡҡа килтереп булыр. Минеңсә, әгәр ҙә аймаҡ нәҫелдең йәшәү сығанағына һәм рәүешенә әйләнһә, был идеяның киләсәге буласаҡ.

**Мират Әхмәт улы:** Ғәмәлдәр һүҙҙән, идеянан башлана. Алдағы йылда Дәүләтша кантондың тыуыуына 220 йыл тулыуға арналған конференцияла сығыш яһаусы докладсыларҙың телмәре төрлө йүнәлештә буласаҡ. Һәм унда, әлбиттә, беҙҙең нәҫелдең дөйөм эше, предприятиеһы хаҡында ла фекер күтәрелергә тейеш. Беҙҙең нәҫелдә спорт тренерҙары, сит илдә эшләүсе табиптар, психологтар бар. Уларҙың да эшмәкәрлеген дөйөм мәнфәғәткә хеҙмәт иттерергә була. Аймаҡҡа килгәндә, Дәүләтша кантондың атаһы Сәйетғәфәр аймағы шул саҡта уҡ булған һәм 3-сө кантондың башҡа башҡорт кантондары араһында айырылып тороуы, кем белә, бәлки, ошо аймаҡ феноменына бәйлелер. Был хәлдә беҙгә ныҡлап өйрәнергә кәрәк. Аймаҡтың исемен хәҙерге заманға яраҡлаштырып, ауыл хужалығы корпорацияһы, тип тә атарға булыр ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ә бит төптән уйлап ҡараһаң, ошолай, Бикмәтовтар кеүек ишле һәм ҡөҙрәтле зат-аралар башҡорттарҙа меңәрләгән, һәм тап шуларҙың вариҫтары хәҙерге ваҡытта милләтебеҙҙең төп өлөшөн тәшкил итә. Әйтергә кәрәк, беҙ милләтебеҙҙең зат-нәҫел институтын, милләттең туғанлыҡ ҡөҙрәтен әлегә тиклем баһалау ғына түгел, был хаҡта уйлап та ҡарағаныбыҙ юҡ. Ә бит, ысынында, милләтебеҙ ҡан туғанлығы менән көслө. Шуға ла шаһитбыҙ: бер ниндәй империаль көс тә туғанлыҡ, ҡан көсөн емерә алмай. Икенсе төрлө итеп, хәҙерге ысынбарлығыбыҙҙан сығып әйткәндә, федераль үҙәк республикаларҙың, милләттең хоҡуғын танырға теләмәйсә, инҡар иткән хәлдә лә, ғаилә мөнәсәбәттәренә, туғанлыҡ араһына бер нисек тә ҡыҫыла алмай. Хәҙерге заманда кешене бер ниндәй дәүләт тә, закон да, йәмәғәтселек тә, суд та, адвокат та яҡлай алмауы бар, әммә һәр беребеҙҙең меңәрләгән ҡан-ҡәрҙәше бындай осраҡта терәк була ала, был көстө бары тик ойошторорға ғына кәрәк. Бөгөн беҙ йәһүдтәрҙе, чечендарҙы донъялағы иң көслө, ҡөҙрәтле һәм берҙәм милләттәр исемлегенә индерәбеҙ икән, улар быға ғаилә традициялары, туғанлыҡ көсө һәм дин ярҙамында өлгәшкән. Бикмәтовтар башлаған ҙур эштең төп әһәмиәте, беҙҙеңсә, тап ошоға ҡайтып ҡала. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, милләттәштәр? Һеҙҙе Бикмәтовтар өлгөһөндә зат институты, туғанлыҡ тураһында фекер алышыуға саҡырабыҙ.**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ әңгәмә ҡорҙо.**



ЗАУЫҠ

# АСЫШТАРҘЫҢ АСЫШЫЛЫР -
## Үҙ баламдың тыуыуылыр…

### Хандар ҡыҙы

**Ҡыҙ баламды ҡыҙғанам…**
**(халыҡ йыры)**

Үрһәләнмә, зинһар, атай,
Йәшнәр өсөн тыуған ҡыҙың.
Тамырымда хандар ҡаны,
Улар юлын ҡыуған ҡыҙың.

Шуға ла бит башым ғорур,
Ярҙам һорап йығылмаҫмын.
Йәндәремдән ҡотоң китмәҫ,
Һүҙем йылғыр, абынмаҫмын.

Ҡараштарым - утлы ҡаҙаҡ,
Инаныуым - алдашмаҫҡа.
Ерем өсөн кәрәк булһам,
Рухым ныҡлы - аҙашмаҫтай.

### Асыр көсөм

**(шаярыу ҡатыш)**

Беҙгә тиклем асыштарҙы
Ата-бабам эшләп бөткән.
Ньютондың баштарына
Тупыр-тупыр алма төшкән.

Самолеттар ярып осҡан
Зәңгәр күкте урталайға.
Диңгеҙҙәрҙе телгеләйбеҙ,
Хас алманы яртылайға.

Луноходтар йөрөй ҡайҙа?
Айҙа, баҫа йүрмәгә тик.
Поездарға ултырҙым да,
Киттем Мәскәү күрмәгә, тип.

Араларҙы яҡынайта
Кеҫәләге вип-телефон.
DVD-нан ҡайтышыраҡ
Тарихтағы пип-патефон.

Асыш өсөн хатта тарих,
Ярҙам итә боронғолоҡ.
Әммә минең өсөн асыш -
Үҙ баламдың тыуыуылыр.

### Ҡош юлында

"Гөлөм, йәнем, йәнекәйем...",
Ҡабатлайһың ҡабат-ҡабат.
Йәнең бар бит, мин булырмын
Йәндәреңдә үҫер ҡанат.

Яралғанға бөтөн булып,
Икебеҙгә ике ҡанат.
Тик тиң булып ҡаға алһаҡ,
Икәү бергә алға ҡарап.

Ҡош юлында ҡалырбыҙ беҙ:
Ҡояш нурын ергә тарап,
Бәхеттәрҙән нурҙар яһап,
Һауаларҙа туйҙар яһап.

* * *

Теләнеләр "индийский" мөхәббәтте,
Теләнеләр, йәлләмәйсә йөрәкте.
Түгел бит йөрәк һөйәкле!

### Һөйөү

Быуырға тип ташҡын юлын
Услап таштар ташлайым.
Ишетмәҫкә гәлсәр сыңын
Өҙөлөп үҙем илайым.

Ярһып ашҡына ташҡын,
Булмай шул юлын быуып.
Булһасы икән һөйөүҙе
Йәшереп, йырын тыйып.

### Һиңә

Үҙеңде лә һағынманым,
Һағындым ҡулдарыңды.
Ипләп кенә бәпәй итеп
Бәүетеп торғаныңды.

Күҙҙәреңдән ояламын,
Һағындым һүҙҙәреңде.
Наҙлы ғына бәрхәт тауыш,
Иркәләй йәндәремде.

Тик үҙеңде һағынмайым,
Үҙгәргәнһең шул үҙең.
Ә ҡулдарың, ә һүҙҙәрең
Нисек торалыр түҙеп?

### Дошманыма

Рәхмәт һиңә, эй, дошманым,
Йәнемде бит сыныҡтырҙың.
Һындырманың тик рухымды-
Нәҫелем бит иң ныҡтарҙан.

Өйрәттең һин яуызлыҡтан
Яҡшылыҡты айырырға.
Юлдарымды ялғанлыҡтан
Хәҡиҡәткә ҡайырырға.

Мәрхәмәтһеҙ был донъяла
Аҙашҡан бер карап инем.
Һин булмаһаң, карап түгел,
Үҙем дә бит харап инем.

### Аҡ өләсәй

Барыһынан ҡасып,
Килгәйнем, ҡайын.
Һине ҡосҡан һайын
Миңә бит ҡыйын.

Балалай әсәгә
Торам һыйынып.
Ярһыуҙарым баҫа,-
Булмаҫ тыйылып.

Өләсәйем баҫҡан
Аҡ ҡайын булып.
Һағыныуым ашты,
Күңелем тулып.

Йылынып та киттем,
Аһ, донъя йәмле!
Аҡ өләсәй яба
Миңә аҡ шәлен.

**Гөлнара ИҠСАНИӘ.**

**Өфөлә "Латифа" башҡорт балалар художество студияһы бер йылдан ашыу эшләй. Кухня бүлмәһендә, өҫтәл тирәләй теҙелеп ултырған һигеҙ бала менән генә башланған шөғөл бөгөн 2 йәшлек кескәйҙәрҙән алып 18 йәшлек егет-ҡыҙҙарҙы, барлығы 40-лаған кешене үҙенә йәлеп иткән. Студия етәксеһе - Эльза Ҡотлобаева һүрәт төшөрөргә өйрәтеүҙең алдынғы, яйлы ысулына өҫтөнлөк бирә. Ул Федераль программа сиктәрендә үҙ эшен асырға теләүселәр өсөн бирелгән аҡса нигеҙендә эшҡыуар булараҡ теркәлеп, үҙ эшен башлаусы.**
**Эльза Ҡасим Дәүләткилдеев исемендәге башҡорт художество гимназия-интернатын, Өфө сәнғәт училищеһының дизайнерҙар факультетын, Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетын тамамлаған. Үҙ мөхитендә ҡайнап, ижадҡа ғына сумып йәшәмәгән, ә уратып алған матурлыҡты башҡаларға ла күрә белергә, аңларға өйрәтеүсе башҡорт ҡыҙы Эльзала бала сағынан "ниндәйҙер бер серле, ғәмәлдә булмаған нәмәләрҙе булдырырға ынтылыш" була. Һүҙҙе үҙенә бирәйек.**

# ИЖАД ҒӘЛИ ЙӘНӘПТӘРЕ...

## бөтөн булмышыңды уға ғағышлауҙы ярата



### Талант ул - яҙмыш

Иң талантлы рәссам, композитор, архитектор - ул Алла, донъялыҡты барлыҡҡа килтереүсе, тормоштағы иң матур һәм күркәм пейзаждарҙы, күренештәрҙе тыуҙырыусы. Кешеләр, йәнлек-кейектәр, ағас һәм үҫемлектәр, тауҙар һынланышы, ғөмүмән, барлыҡ Ер шары - талантлы Рәссамдың эше. Кем һәм нисек кенә тырышмаһын, унан арттыра алмаҫ. Беҙ шишмәләр сыңлауын, ҡоштар һайрауын, ағастар шаулауын, елдең йә талғын, йә шашып-ярһып иҫеп ҡуйыуын тыңлап, күреп, арымай-ялҡмаясаҡбыҙ. Рәссамдар ошо камиллыҡты - һүрәттәрендә, композиторҙар моңдарында сағылдырырға тырыша. Талант ул - яҙмыш, тәҡдир. Бар кешегә лә Аллаһы Тәғәлә талант бирә, бары тик уны үҫтереп, асырға ярҙам итергә генә кәрәк. Тыумыштан ныҡ талантлы булып тыуғандар була, уларға ҡулына мольберт һәм ҡағыҙ алып, күргәндәрен һынландырырға ғына ҡала, ә кемделер өйрәтеп, аңлатып ебәреү кәрәк. Хәҙерге заман кешеһе уҡый, яҙа һәм компьютерҙа эшләй белгән кеүек үк, һүрәт төшөрөү нигеҙҙәренә лә өйрәнергә тейеш, минеңсә. Үҙемә килгәндә, бәләкәй саҡта үҙемдә булған зиһен, һәләт ярҙамында хис-тойғоларҙы әйтеп бирә алмай инем, һүрәт төшөрөү һәләтенә мохтаж булғанмындыр, күрәһең. Ул белемде шул ваҡытта биргән булһалар, бәлки, бөгөнгө көнгә тиклем ярайһы уҡ уй-хыялдарымды тормошҡа ашырыр инем. Хәҙер ҙә бәләкәй балаларҙың күбеһе үҙ талантын тик төплө белеме булмау сәбәпле үҫтерә алмай. Мин уларға мөмкин тиклем ярҙам итергә тырышам.

### Ижад хаҡында

Ижад - үҙе бер айырым донъя. Матурлыҡ донъяһы. Ижади кешегә илһам төшөнсәһе яҡын. Илһам - ижадты алға этәреүсе, бер урында тапанырға ирек бирмәүсе көс. Ләкин шулай ҙа булыуы мөмкин, күңелдә илһам булмаһа ла, картинаны заказ буйынса яҙа башлайһың. Ә илһам, эш барышында мотлаҡ киләсәк. Ошондай, бөтә донъяға билдәле, быуаттар буйы һоҡланырлыҡ картиналар бар, шуға күрә тәү сиратта илһам ғына бөйөк әҫәр тыуҙырыуҙа төп шарт тип иҫбатлап булмай.

Мине ижадҡа ваҡыт етмәүе борсой. Ә өҙөп-йыртып ижад итергә маташыу йүнлегә алып килмәй, сөнки ижад һинең бөтә булмышыңды үҙенә бағышлағанды ярата. Күп ваҡытыбыҙҙы ниндәйҙер донъя ваҡлыҡтарына әрәм итәбеҙ, юҡ-барға әүрәп, ижад итеү өсөн бирелгән һанаулы ғына ваҡытыбыҙҙы кәрәкмәгәнгә сарыф итәбеҙ, ҡайҙалыр ашығабыҙ, түҙемһеҙлек белдерәбеҙ. Ижад, сәнғәт менән бәйле кешеләргә айырыуса сыҙамлыҡ кәрәк. Нәҡ ошо сифаттың булмауы күптәрҙе талантын ергә күмергә, һауаға буш ҡыуыҡ итеп осорорға мәжбүр итә. Башта әллә күпме ижади уйҙар өйрөлөп тә, бөтә иғтибарыңды һәм сыҙамлығыңды усыңа йомоп, эште аҙағынаса алып барып еткереү һәләтенә эйә булмаһаң, ниәтең тормошҡа ашмаясаҡ. Һәр бер ижадтың күҙгә күренмәгән яғы бар, уларҙы йырып сығырға өйрәнергә кәрәк. Ҡайһы саҡ бөтөнләй кәрәкмәгән эштәр менән мәшғүл кеүекһең, ә ысынында иһә, һәр деталь, һәр эш бер-береһен тулыландырып, әҫәрҙе бер бөтөн итеүҙә ҡатнаша. "Ижад кешеләре йәмғиәт тарафынан саҡ ҡына ситләтелгән, йәберһетелгән һәм ниндәйҙер кимәлдә ярлы ла булырға тейеш, тик шул саҡта ғына улар ысын мәғәнәһендә Ижадҡа хеҙмәт итә ала", - тигән философик фекерҙә күпмелер дөрөҫлөк барҙыр ул. Бойондороҡһоҙ рәссам, минеңсә, йә ярлы, йә бай булырға тейеш. Тик шул саҡта ғына ул тулы һулыш менән ижад итә. Ярлының нимәнелер юғалтыу ҡурҡынысы юҡлығы ыңғай роль уйнаһа, хәлленең донъяуи мәшәҡәттәргә иғтибар итмәҫлек байлығы булыуы ижадҡа ярҙам итә, тип уйлайым. Ләкин ниндәй генә кимәлдә ситләтелгән йә үрләтелгән ижадсы булмаһын, уның үҙенең эшкә талапсанлығы ныҡ булмай тороп, бер ниндәй ҙә ижад тураһында һүҙ йөрөтөү мөмкин түгел. Нәҡ үҙ-үҙенә булған ижади талапсанлыҡ беренсе урында торорға тейеш.

Ижадсыға тормошта күп факторҙар ярҙам итә. Минең үҙемә, мәҫәлән, тыуған илемдә үҙ халҡым араһында йәшәүем ижадҡа этәреүсе көс. Үҙемдең 14 быуынға тиклем шәжәрәмде белеүем дә минә ҙур таяныс. Башҡорт халҡының тарихы, мәҙәниәте, йәшәйеше, беҙҙең тәбиғәт - барыһы ла һоҡландыра, күңелемә яҡын һәм ҡәҙерле. Ә тирә-яҡ менән гармонияла йәшәүем һәләтемде үҫтерә, халҡымдың матурлығын, күркәмлеген тойоп һәм аңлап эш итеүем яңынан-яңы картиналар яҙыуға булышлыҡ итә.

### Иртәгә ижадҡа ҡарата икенсе ҡараш буласаҡ

Кешенең донъяға ҡарашы төрлө, үҙенә генә хас буяуҙар менән сыбарланған, уйҙар менән сырмалған. Һәм һәр беребеҙ кешелектең рухи ҡаҙнаһына үҙенә генә хас булған ҡабатланғыһыҙ нағыш яға. Ә милләт - айырыуса. Быуаттар буйы формалашып килгән фекерләү, мәҙәниәт, рух, көс һәр милләттә төрлөсә, улар айырыла һәм, әлбиттә, был ижадта сағылыш тапмай ҡалмай. Кеше айырым бер халыҡтың вәкиле булараҡ донъяға килә, тәрбиәләнә, тыуған халҡының моңон, булмышын үҙенә һеңдереп үҫә. Һәм нәҡ ошо айырмалыҡтар менән рәссам үҙ халҡы өсөн генә түгел, ә барлыҡ кешелек өсөн әһәмиәтле, ҡиммәтле һәм баһалы. Һәр рәссам үҙ милләте өсөн генә хас булған күҙлектән тирә-яғына баға һәм был уның эштәрендә сағылыш тапмай ҡалмай. Бер пейзажды, бер ваҡиғаны ике кеше бер төрлө күрергә мөмкин, ә күңеле менән уларҙы барыбер төрлөсә ҡабул итә. Рәссам күңеле быға айырыуса һиҙгер, шуға күрә, мәҫәлән, бер үк тәбиғәт күренешен дә ике милләт рәссамы төрлөсә ҡабул итеп, картиналарында төрлөсә сағылдырырға мөмкин. Һәм рәссамдың эшенә лә төрлө милләт кешеһе үҙ халҡына ғына хас булған үҙенсәлектәр күҙлегенән сығып ҡарай. Башҡорт рәссамдары, бөтөн донъялағы кеүек үк, төрлөләр, тарҡауҙар. Ләкин уларҙы бергә туплаусы көс - ул тыуған халҡына булған һөйөү, ихтирам.

Врач - кеше тәнен дауалаусы булһа, рәссамды кеше йәнен дауалаусы тип атарға мөмкин. Бер картина кешене тынысландырыу, уны лирик ҡалыпҡа һалыуға эйә булһа, икенсеһе, киреһенсә, кешене тоҡандырып, дөрләтеп ебәрергә һәләтле. Нисек кенә булмаһын, сәнғәт рухи хазинаны арттырыуға булышлыҡ итергә тейеш. Бөгөнгө көндә ысын сәнғәттең, ижадтың ҡәҙере китеберәк торған кеүек, ләкин яҡын киләсәктә уның әһәмиәте артып, иртәгә ижадта икенсе төрлө заман буласаҡ. Сөнки һәр кеше донъяға гүзәллекте тоя белеү һиҙемлеге менән тыуа һәм быны бер ниндәй тормош ҡанундары ла ситкә алып ташлай алмай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ижад, сәнғәт - кешелекте йәмғиәттә булған әхлаҡи ҡиммәттәргә ылыҡтырыуҙың иң ныҡлы ысулдарының береһе. Ул кешенең эске донъяһын, эмоциональ кисерештәрен сағылдырыусы көс. Еңел-елпе, тәрәнлеге булмаған, мәҙәниәткә һәм яҡтылыҡҡа ынтылыуҙы күҙалламаған ижадтың халыҡ күңеленә барып етеүе лә икеле. Шул уҡ ваҡытта күңелеңдәге уйҙарҙы ижадыңа алып барып еткереү һәләтенә эйә булыу өсөн үҙеңә лә яҡты кеше булыу мөһим.**

**Гөлназ САФИУЛЛИНА**
**яҙып алды.**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ*

## ҮЛЕ СӘСКӘЛӘРГӘ ҺОҠЛАНМА...

### тере сәскәләр үҫтереп һөйөн

- Нәҫел көсө - атайҙа, ҡото - әсәйҙә: икеһе бер булғанда, нәҫел үҫер, нығыныр.
- Ҡулдарыңа хужа бул: муйыныңа бәйләмә - һаранланма, артыҡ йәймә - үтә йомартланма.
- Тормошоңдо ниндәй юҫыҡта ҡораһың, нәтижәһе лә шулай булыр.
- Ғүмере буйы ояла белеү хисен юғалтмаған кешенең күңеле тыныс, аҡылы саф, тормошо паҡ булыр.
- Һәр саҡ башлаған эшеңдең уңышлы тамамланыуына, үҙеңә лә, башҡаларға ла файҙаһы тейеүенә ышан - был ышаныс хеҙмәт емешеңде күрергә дәртләндерер.
- Намыҫыңды юғалтма: намыҫһыҙ кеше - үҙәкһеҙ ағас, үҙенән-үҙе ҡолай.
- Тәрбиәһеҙ һәм ғәмһеҙҙәрҙән һаҡлан, ғибрәт ал: улар һәр ерҙә зыян эшләй, кешеләрҙе талаштыра.
- Киләмдәге үле сәскәләргә һоҡланма, ерҙә тере сәскәләр үҫтереп һөйөн.
- Тормошта яҡшылыҡ менән яманлыҡ һәр саҡ бергә йөрөй - бер шаҡшыға бер яҡшы - кем булыуҙы үҙең һайла.
- Эшлә, уйла, тик торма, тик торғанға шайтан суҡмар тотторған, кеше үлтерергә бойорған.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*ИНТЕРНЕТТАН*



# АТАЙЫҢ МЕНӘН ДУҪ БУЛ - ҡайғы белмәçһең

■ Татуировкалар С гепатиты һәм ҡан аша күсә торған башҡа сирҙәр менән ауырыу хәүефен көсәйтә. Британ Колумбияһы университеты (Канада) хеҙмәткәрҙәре 30 илдә тикшеренеүҙәр үткәреп, тәндәге татуировкалар һәм С гепатиты сире араһында бәйләнеш барлығын асыҡлаған. Был мәкерле сир күберәк йәштәрҙә һәм иркенән мәхрүм ителгәндәр араһында йышыраҡ осраған. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе доктор Сиаваш Джафари әйтеүенсә, татуировка төшөрөү өсөн ҡулланылған ҡорамалдар инфекция таратыусы булып тора. Бынан тыш, татуировка төшөрә торған буяуҙар ҙа инфекция сығанағы була ала, сөнки улар стериль һауыттарҙа һаҡланмай. Етмәһә, буяуҙарҙың составына төҙөлөш буяуҙары, компьютер принтеры ҡараһы, сәнәғәт күмере ҡушылған булыуы ихтимал. Был матдәләрҙең токсик компоненттары ҡан тамыры системаһы аша бөйөрҙәргә, үпкә һәм лимфа төйөндәренә үтеп инә. Һуңғы ваҡытта модаға ингән, ҡарағыла яҡтыра торған таты-буяуҙар сәләмәтлек өсөн бигерәк хәүефле, ти белгестәр.

■ Бала тормошонда атайҙың роле әсәйҙекенә ҡарағанда ҙурыраҡ, тип раçлай психологтар. Бәләкәй саҡтарында аталары менән тығыҙ аралашҡан малайҙар, ҙурайғас, стрестарға һирәгерәк бирешә икән. АҠШ-тың Калифорния штаты психология университеты үткәргән тикшеренеүҙәрҙә 25 йәштән алып 74 йәшкә тиклемге 900-ҙән ашыу ҡатын-ҡыҙ һәм ир-ат ҡатнашҡан. Уларҙың барыһынан да һуңғы һигеҙ көн эсендә тормоштарында кисергән ауыр эмоциональ һәм психологик тетрәнеүҙәре һәм ата-әсәләре менән мөнәсәбәттәре тураһында һорағандар. Күптәр әсәләрен тик яҡшы яҡтан ғына телгә ала. Бындай респонденттарҙа психологик стресс кимәле бала саҡта ата-әсә наҙын етерлек алмаған кешеләрҙекенә ҡарағанда 3 процентҡа түбәнерәк булып сыҡҡан. Әммә атайҙар тураһындағы һорауға яуаптар ғалимдарҙы аптырауға һала. Профессор Мелани Маллерс әйтеүенсә, бала саҡта атаһы менән дуҫ булған ир-егеттәр стрестың нимә икәнен дә белмәй, ә ҡатын-ҡыҙҙарҙа бындай ҡанун күҙәтелмәй.

■ Экспертар билдәләүенсә, мәктәптә хәҙер киң ҡулланылған лазер күрһәткес таяҡтары күҙҙәр өсөн зыянлы булыуы бар. Бигерәк тә ҡиммәт булмаған йәшел лазерлы бындай ҡоролмалар инфраҡыҙыл ут бүлеп сығара икән. АҠШ-тың Стандарттар һәм технологиялар милли институтынан Чарлз Кларки һәм уның хеҙмәттәштәре 10 милливатт ҡеүәтле бындай ҡоролмаларҙың өс тибын тикшергән һәм улар бүлеп сығарған нурҙарҙың күҙҙәргә насар тәьҫир итеүен иҫбатлаған. Ғалимдарҙың мәғлүмәттәренә ҡарағанда, был проблеманы лазер күрһәткес таяҡтарына инфраҡыҙыл нурҙарҙан фильтр ҡуйып хәл итеп була.

■ Великобританияның Кардифф университеты ғалимдары Стенли Зэммит етәкселегендә Швецияла ҙур социологик тикшеренеүҙәр үткәреп, йәмғиәттә психик сирҙәрҙең таралыу законлығын асыҡларға тырышҡан. Оҙайлы тикшеренеүҙәр алып барғандан һуң, ғалимдар психик сир барлыҡҡа килеүендә шәхес характеристикаһы түгел, ә уның ҡайҙа йәшәүе мөһимерәк, тигән һығымтаға килә. Ауыл кешеләре бала саҡтан ҡалала йәшәүселәргә ҡарағанда психологик яҡтан көслөрәк булып сыға.

*КИТАБЕННАС*

# ҮҘГӘРТЕП ҠЫЙРАТАБЫҘ...

## ҡора башлағаныбыҙ юҡ әле

**Алтмыш яҙҙар үтте ташҡындарҙа**
**Алтмыш аҙым ғына юл һымаҡ.**
**Күңелдәрҙә яра төҙәлмәгән,**
**Мәңге иремәçлек боҙ һымаҡ...**

**Бөйөк Октябрь революцияһы, граждандар һуғышының ялҡындары һүрелеүгә 20 йыл ваҡыт та үтмәй, яңы тормош ҡороуға йәнен-тәнен аямай фиҙаҡәр көрәшкән халҡыбыҙ, бығa тиклем ярым феодаль тормош кисергән һәм нигеҙенә тиклем ҡыйратылған Рәсәйҙе аяҡҡа баçтырып, индустриялаштырыуға өлгәшә: 1929 йыл - Магнитострой, 1931 йыл - ГОЭЛРО - илде электрлаштырыу пландары тормошҡа ашырыла, 1930 йыл Сталинград трактор заводы, 1931 йыл "АМО" - автомобилдәр заводы, 1932 йыл - ЗИС, 1933 йыл - Силәбе тракторҙар заводы, Беломорканал, 1937 йыл - Мәскәү метроһы, һ.б. ил именлеген, халыҡ ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү өсөн мөһим ҡеүәттәр, йәшәү сығанаҡтары сафҡа индерелә. Бөгөнгө бөтә яҡтан да уңай шарттары, бай технологиялары, үҫешкән сәнәғәт тармаҡтары заманы күҙлегенән ҡарағанда, шул дәүерҙә ҡыҫҡа ваҡыт арауығында өлгәшелгән уңыштар ышанмаçлыҡ, әкиәттәге мөғжизәле үҙгәрештәр кеүек күренә.**

Ә яңы үҙгәртеп ҡороуҙар башланғаны бирле 25 йыл үтте, беҙ һаман үҙгәртеп ҡыйратабыҙ, ә ҡора башлағаныбыҙ юҡ әле. Халыҡ революциянан һуңғы үҙгәртеп ҡороу заманында үҙен-үҙе яңы шарттарҙа йәшәүгә яраҡлаштырған: наҙанлыҡтан арынған, яңы аң тыуҙырған, маҡсатлы, гәмле, сәмле йәшәп, эшләп, тыуған илен донъяла иң ҡеүәтлеләр сафына күтәреүгә өлгәшкән. Шул уҡ мәлдә илебеҙҙең уңыштарына көнләшеүселәр, уның тағы ла көсәйеп китеүенән ҡурҡыусылар, аçтыртын ғына үҙҙәренең яһил эшен эшләүселәр ҙә байтаҡ була. Ил эсендәге генә түгел, тышҡы дошмандар ҙа йәш дәүләткә ҡурҡыныс тыуҙырып тора. Шулай итеп, 1941 йылдың аяҙ, саф таңында фашист илбаçарҙары ас ҡарғалар кеүек ватаныбыҙға ташлана.

Илебеҙ тарыған ошо хәүефле хәлдәрҙән башлап күптән инде районыбыҙҙа билдәле кеше, милләтебеҙҙең арҙаҡлы улы Азамат Тажетдинов үҙенең герой яҡташтарыбыҙға арналған "Күңелдәрҙә яра төҙәлмәгән..." исемле "Ғилем" нәшриәтендә баçылып сыҡҡан яңы китабын. 1941 йылда халҡыбыҙ яҙмышына төшкән фажиғәнең һәләкәттәре, ҡайғы-хәсрәттәре, аяныслы, ғибрәтле хәлдәре тураһындағы был тарихи китап яугир яҡташтарыбыҙҙың, тыл һалдаттарының батырлығына, енеүсе халыҡҡа, Бөйөк Еңеүгә мәҙхиә. Шундай афәт кисереп, ауырлыҡтарға ҡаршы берҙәм күтәрелә алған халыҡ бер ваҡытта ла еңелмәç, тигән фекер еткерә уҡыусыларына автор. Яуҙан еңеү яулап ҡайтҡан батырҙарҙың туғандарының, яҡындарының йылы мөнәсәбәтле хәтирәләрендә ул йылдарҙа күпте күргән, күпте кисергән халҡыбыҙҙың күңел таҙалығы, күңел йылылығы, кешелеклә һөйөү, киләсәккә өмөтөн өҙмәүе тураһында ентекләп бәйән ителә китапта. Аяныслы хәлдә лә яҡты, етеш тормошҡа ышанысын һаҡлап ҡала алған беҙҙең ата-олатайҙар, әсәйинәйҙәр, сөнки берҙәмлектә - бәрәкәт, тарҡаулыҡта - һәләкәт икәнен яҡшы аңлағандар.

Яуҙа һәләк булғандар, хәбәрһеҙ юғалғандар тураһында мөмкин тиклем тулы мәғлүмәт бирергә тырышып, яугирҙәрҙең батырлығына, саялығына лайыҡлы иғтибар, ихтирам күрһәтеп, тыл хеҙмәткәрҙәре - погонһыҙ һалдаттарҙың фиҙаҡәр хеҙмәтенә дан йырлай автор. Көндө төндән айырмай, йән-тәнен аяламай ил именлеге, халыҡ яҙмышы өсөн көрәшкән ябай кешеләр - теҙгенгә буйы еткән балалар, әсәйөләсәйҙәр, оло йәштәге ауылдаштарының героик хеҙмәте, аяныслы яҙмышы тураһында йәне әсенеп яҙа атайһыҙлыҡтың бөтә әсе-сәсөһөн үҙ елкәһендә татыған Азамат ағай.

2-се Эткол ауыл советы биләмәһенә ингән 3 ауылдан 400-ҙән ашыу кешенең исеме иҫкә алына был китапта: ҡулына хәрби йә хеҙмәт ҡоралы тота алған һәр ауылдашыбыҙ дәһшәтле йылдарҙа иленә фиҙаҡәр хеҙмәт иткән! Тимәк, был китап 3 ауылда элек, хәҙер йәшәгән һәр ғаиләнең яҙмышына ҡағыла. Ҡәҙимге тормош кисергән, беҙҙең эргәлә йәшәгән күршеләрҙең һәр береһе донъяһына афәт янағанда тиңһеҙ әрһеҙлеккә, сикһеҙ ҡыйыулыҡҡа һәләтле икәненә һөҡланып яҙыла китапта.

"Тулы бәхетле булыр өсөн кешегә данлы ватаны булыуы зарур" тигән бер аҡыл эйәһе. Бөйөк, данлы, көслө ватаны бар кеше генә тулы бәхетле була ала! Ысынлап та, тоғро фекер: бөгөн ауылдаштар, күршеләр, туғандар, ғөмүмән, кешеләр бер-береһенән ситләшкән мәлдә, был китап, элек бер туған булып бер тәйәктә йәшәгән кешеләрҙе хәҙергеләрҙең иçенә төшөрөп, хәтирәләрен еткереп, бер-береһенә йылы мөнәсәбәттәрен әйттереп, берләштерергә тырыша, хәҙерге туған-тыумасаларҙы, күрше-күләнде, ҡәрҙәш-ҡорҙаштарҙы яҡын аралашып, ярҙамлашып, татыу, берҙәм йәшәргә саҡыра. Үҙ дәүерендә ил яҙмышы хәл ителгән дәһшәтле йылдарҙа беҙҙең ағай-атай-олатайҙар берҙәм булыуы арҡаһында бөтә ауырлыҡтарҙы, ҡайғы-хәсрәттәрҙе еңеп сығып, беҙгә - киләсәк быуынға тыныс тормош, етеш донъя васыят иткән. Яҡташтарым бөгөн дә берҙәм, көслө булһын ине, тип теләй автор. Ниәте изге - афарин! Яуыҙдар илебеҙҙең данын юҡҡа сығарып, халҡын аҙҙырып, аңынан яҙҙырып, тарихын онотторол маташҡан мәлдә, тыуған иленең ҡаҙаныштарына, ватандаштарының еңеүҙәренә лайыҡлы баһа бирел, иленең данын һаҡлап, халҡының иманын яҡлап алтын хәрефтәр менән тарихҡа яҙыусы Азамат Әгзәм улы кеүек уҙаман мәғрифәтселәребеҙ булыуы яҡты киләсәккә өмөтләндерә.

Китап, тарихи, архив материалдары, цифр, таблицалар байтаҡ булыуына ҡарамай, әҙәби әҫәр кеүек еңел уҡыла, бай мәғлүмәттәрҙең эҙмәэҙлекле төҙәлөүе йөкмәткеһенең мәғәнәһен арттыра. Күңелдә матур хистәр уятырлыҡ, төплө фекерҙәр тыуҙырырлыҡ оло ихтирамға лайыҡлы хеҙмәт!




Алтмыш яҙҙар үтте һағыштарҙа,
Һуңғыһы ла килде бик һуңлап.
Күңелдәрҙә яра төҙәлмәгән...
Һыҙлай әле һаман һулҡылдап.

**Урал МОСТАФИН.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# РИШҮӘТ БИРЕҮ - ГОНАҺ

**ҺОРАУ: Шәриғәт буйынса ришүәт рөхсәт ителәме?**

Ришүәт алып кеше яңылыша. Ул тыйылған юл менән аҡса эшләй булып һанала. Аллаһ алыусыны ғына түгел, биреүсене лә ҡәһәрләгән. "Ришүәт" тигән һүҙ генә лә гонаһ тигәндә аңлата. Кем уны үтәй, Аллаһҡа ла, имандыларға ла ярамаç.

Үҙенең бер хәҙисендә Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Ришүәт биреүсе лә, алыусы ла тамуҡҡа эләгә", - тип хәбәр итә. Ришүәт бер ҡасан да шәриғәт буйынса рөхсәт ителгән күренеш булып һаналмаçаҡ. Шулай ҙа түбәндәге ике осраҡта, мосолман ришүәт бирһә лә, ғәйепкә тарттырылмауы мөмкин:

- Әгәр уға ғәҙелһеҙ рәүештә төрмәгә ябырға тигән хөкөм сығарылһа һәм ул ришүәт ярҙамында урынһыҙ язалауҙан һаҡланып ҡалырға ниәтләнһә.
- Әгәр ул яттыҡын үҙләштерер өсөн түгел, ә үҙенекен алыр өсөн ришүәт бирергә мәжбүр булһа.

Ике осраҡта ла һүҙ тик үҙ хоҡуҡтарынды яҡлап ҡалыу өсөн бара.

*✓ Әбйәлил ишан уларға бер доға яҙып тоттора. - Был янғын туҡтатыу доғаһы. Ошоно янып торған утҡа ырғытығыҙ, аҙаҡ ни булғанын үҙегеҙ күрерһегеҙ... Теге яҙыуҙы утҡа ырғытыуҙары була, көслө итеп ямғыр яуа башлай.*



*ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК*

**Ғафури районының Сәйетбаба ауылы - әүлиәләр төйәге. Бында әүлиәләр, хәҙрәттәр, имамдар тураһында төрлө хәтирәләр, риүәйәттәр телдән-телгә һөйләнеп, быуындан-быуынға күсеп, бөгөнгәсә халыҡ хәтерендә йәшәп килә. "Беҙҙең ауылды әүлиәләр, изгеләр рухы һаҡлай", - ти сәйетбабалар һәм әүлиә Әбйәлил ишан, Сабир хажи хәҙрәт һәм Шәмсетдин хажи хәҙрәт, мәшһүр Мөхәмәтша мулла, арҙаҡлы Әбйәлил мулла, Хәлил мулла, Хатип муллалар тураһындағы хәтирәләрҙе тәрән диңгеҙ төбөнән бөртөкләп йыйылған ынйынан берәмтекләп теҙелгән мунсаҡтай күреп, ҡәҙерләп һаҡлайҙар.**

# ӘБЙӘЛИЛ ИШАН

Ил ҡарттары һөйләүе буйынса, Ташбашы тауында бер-нисә әүлиә зыяраты бар. Унда бесән сапҡан бер ағай: "Ҡаты ғына ауырып йөрөй инем, ололарҙың ошо тауҙың мөғжизәһе тураһында һөйләүе дөрөҫмө икән, тип, Ташбашына барҙым да әкрен генә йөрөп, бесән саптым. Алламдың биргәненә шөкөр, йүнәлдем дә киттем",-тип һөйләй торғайны. Хәле мөшкөлләнгән, яҡындары күпкә бармаҫ тип өмөтөн өҙгән был кеше, ысынлап та, һауыға. Нығынып алып, яңынан ун биш йыллап ғүмер итә.

Еләк йыйған кешеләр ҙә тауҙың һаулыҡҡа файҙалы илаһи ҡөҙрәте барлығын раҫлай. Бер инәйебеҙ ошоларҙы һөйләне:"Ташбашында еләк йыйып йөрөйөм. Ҡапыл йомшаҡ ҡына йылы ел иҫеп үтте. Арыуҙарым, сарсауҙарым, билемдең ауыртыуҙары ҡул менән һыпырып ташлағандай юҡҡа сыҡты. Ни булды был, әллә тау башына ерләнгән әүлиәләрҙең шифалы тыны булдымы?" Күңеле күтәрелеп киткән әбей күнәген тултырғансы еләк йыйып алып ҡайта ла, ҡаҡ ҡоя. Аҙаҡ ҡыш буйы һәр көн иртән шул еләк ҡағы менән тәмләп сәй эсә, ауырыу-сырхауҙың ни икәнен дә онота.

Ташбашы тауы итәгенән урғылып сыҡҡан шишмәнең һыуы ла шифалы, тиҙәр. Элек кеше, йыраҡ тип тормай, шунда һыуға бара торғайны. Ололарҙың һаман да: "Эй, ошо Ташбашы шишмәһе һыуының тәмлелеге!" - тип, ауылдың бер осонан икенсе осона 3-4 саҡрым ара үтеп, көйәнтәләп һыуға барғаны иҫтә. Баҡтиһәң, әүлиә шишмәһе булған икән ул.

Сәйетбаба ауылына килеп ингәндә, оло юлдың һул яғында, 17 быуатҡа ҡараған бик боронғо зыяратта биҙәкле рәшәткә менән уратып алынған бер яңғыҙ серле ҡәбер бар. Унда Әбйәлил ишан ерләнгән, тиҙәр.

Йыш ҡына кешеләр Әбйәлил ишан менән Әбйәлил мулланы бутай. Улар икеһе ике шәхес, йәшәүҙәре төрлө быуатҡа ҡарай. Әбйәлил мулла 1879 йылда тыуып 1966 йылда, 87 йәшендә гүр эйәһе була. Ә Әбйәлил ишан 17-18-се быуаттарҙа йәшәй. Һикһәндән ашыу йәш йәшәгән был әүлиә фараз буйынса 1780 йылдарҙа тыуған булырға кәрәк, вафаты 1856 йылда икәнлеге асыҡ билдәле. Сәйетбаба ауылында тыуып, бынан быуат ярым элгәре йәшәп киткән әүлиәнең исеме бөгөн дә халыҡ телендә, уны һағынып иҫкә алалар. Уның әүлиәлеге, кирамматтары, илаһи хикмәт эйәһе булыуы тураһында төрлө риүәйәттәр һаман да йәшәй ололар хәтерендә.

Халыҡ хәтере буласаҡ әүлиәнең ҡәберҙә тыуыуы тураһында ошондай риүәйәт һаҡлай. Әсә буласаҡ ҡатын иҫтән яҙып, оҙаҡ ваҡыт хәрәкәтһеҙ ятҡас, ахырыһы, үлгәндер, тип, ерләргә булғандар. Ҡәбер ҡаҙыусылар уны ерләп, доғалар уҡып, ҡайтыу яғына ҡуҙғалыуҙары була, ҡәберҙән бала илаған тауыш ишетелә. Кире ҡаҙып ҡараһалар, ҡәберҙә яңы тыуған сабый ята, ти. Күрәһең, ҡатын мәрткә киткән булғандыр. Ер ҡуйынына һалғас, уянып, балаһын тыуҙырған да шунда уҡ йән биргәндер. Баланы алам-һалам кейемгә генә төрөп, ауылға алып ҡайталар. Уны бөтөн ауыл, дин әһелдәре, өлөшлө бала, буласаҡ изге йән, тип нарыҡлай. Бер бай кеше уны үҙенә уллыҡҡа ала. Етемде ҡаҡмай-һуҡмай ҡәҙерләп үҫтерәләр. Зиһенле, зирәк малай башта ауыл мәҙрәсәһендә белем ала, әҙерәк ҙурайғас, Ашҡаҙар-Балыҡлы мәҙрәсәһенә ебәреп уҡыталар. Бында Әбйәлил шәкерт ғалим һәм сәсән Хөснөтдин ахундан дәрестәр ала. Бөйөк шағир Сәғдиҙең күп кенә шиғырҙарын яттан һөйләй торған Ахун хәҙрәттәре үҙе фарсы, ғәрәп телен яҡшы белгән була. Заманының алдынғы ҡарашлы, үҙе уҡытҡан шәкерттәрҙең аңына йоғонто яһай алырлыҡ шәхес була Хөснөтдин ахун. Был мәҙрәсәнең бик бай китапханаһы ла булған. Әбйәлил шәкерт китап уҡырға яратҡан, китап күсереп яҙыуға ҙур иғтибар биргән. Төплө белем алыуға өлгәшкән. Мәҙрәсәне тамамлап, ауылға ҙур ғалим, дин белгесе булып ҡайтҡанда ул үҙе күсереп яҙған бер арба китап тейәп ҡайтҡан, тиҙәр. Аҙаҡ ул Үтәктә, хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районы Үтәгән ауылында, Ҡарғалы, Мырҙаҡай (Сәйетбабаның элекке исеме) мәҙрәсәләрендә мөғәллим булып эшләй. Стәрлебашта Бохарала уҡып ҡайтҡан Ниғмәтулла Биктимеров мөҙәрислек иткән мәҙрәсәлә дәрестәр бирә. Бында ул суфыйсылыҡ менән мауыға, уның алдан күреү, табиплыҡ, әүлиәлек һәләте асыла.

Әбйәлил ишандың әүлиәлеге, кираматтары тураһында күп кенә риүәйәттәр һаҡланған. Ғафури районының Үтәк ауылында уҡытып йөрөгән сағы була. Дәрес барған саҡ. Мөғәллим ҡапыл ғына һөйләп торған еренән туҡтай ҙа шәкерттәренә: "Дилбегә алығыҙ ҙа, тиҙ генә Егән буйына йүгерегеҙ", - ти. Йылға шашып ташҡан осор була. Шәкерттәр Егән буйына йүгереп килеп етһә, нисектер, батмай ҙа, ағып та китмәй, һыу уртаһында бер егет тора. Уға дилбегә ырғыталар һәм ташҡындан ярға һөйрәп сығаралар. Ҡотҡарылған егет аҙаҡтан: "Инде баттым тигәндә, һыу төбөнән бер ағас үҫеп сыҡты, шуға тотоноп торҙом",- тип һөйләгән.

Әбйәлил ишандың йәнә бер кираматы. Ишан хәҙрәттәре дәрес биреп тора. Ҡапыл барыһын һиҫкәндереп, уң ҡулын күтәрә лә, ниҙелер һөйрәп сығарған кеүек, хәрәкәт яһай. Шунан шәкерттәренә ҡарап: "Ҡоҙоҡ эргәһенә барығыҙ", - ти. Шәкерттәр йүгереп килеп етһә, унда ете-һигеҙ йәштәрҙәге бала илап тора.

- Ни булды, ниңә лыс һыу булдың? - тип һорайҙар унан.

- Һыу алып эсәйем, тип, күнәккә үрелгәйнем, ҡоҙоҡҡа ҡолап төштөм дә киттем. Мулла ағай килеп, ҡулымдан һөйрәп сығарҙы,- тигән бала.

Үтәгән ауылында ла кираматын күрһәтә ул. Ауылда янғын сыға. Ут бер юлы бер нисә өйҙө ялмап ала. Ҡаты хафаға төшкән күршеләре уттың үҙҙәренә күсеүенән ҡурҡып, Әбйәлил хәҙрәткә йүгереп киләләр. "Хәҙрәт, ярҙам ит, ҡылсы шунда бер хикмәтенде". Әбйәлил ишан уларға бер доға яҙып тоттора.

- Был янғын туҡтатыу доғаһы. Ошоно янып торған утҡа ырғытығыҙ, аҙаҡ ни булғанын үҙегеҙ күрерһегеҙ...

Теге яҙыуҙы утҡа ырғытыуҙары була, көслө итеп ямғыр яуа башлай. Силәкләп ҡоя ғына. Ут, янырға ирек бирмәнегеҙ, тип үпкәләгәндәй, бер аҙ шышылдап тора ла, әкренләп быҫҡып һүнә. Күрше-тирә иркен тын ала. Аҙаҡ Әбйәлил муллаға бөтә ауыл рәхмәт әйтә.

Үтәктә уның ҡөҙрәтенә шикләнеп ҡараған бер ир кеше була: "Ишанды әүлиә, барыһын алдан белә, үтә күрә, тиҙәр. Әллә, мин һис тә ышана алмайымсы. Ундай ҡөҙрәте булғас, ниңә беҙҙең һымаҡ ярлы йәшәй? Ниңә анау серегән бай һыҡмыр Ғарифйән кеүек, балда, майҙа йөҙмәй?" Бер көндө хәҙрәт эргәһенән үтеп барған теге ирҙе туҡтата ла: "Һыйырыңды эҙләп, ҡыҙырып сығып китмә, юғалған малың бөгөн үҙе ҡайтып килер",- ти. Ысынлап та, кискеһен оҙаҡ йөрөп һыуалған һыйыры баҡырып ҡайтып инә. Ир кеше аҙаҡ хәҙрәттән ғәфү үтенә.

Сәйетбабаға уҡытырға ҡайтҡас, Әбйәлил ишанға төрлө яҡтан бәләҡазаға тарыған кешеләр, ауырыуҙар ағыла башлай. Ул быума/эпилепсия/, күҙ тейеү, аҡылдан яҙыу һымаҡ сирҙәрҙе ҡарай, йылан сағыуҙан дауалай. Үләндәрҙең шифалы серен белә, уларҙы дауалағанда ҡуллана, бал, бал ҡорто прополисы, һитә менән дауалай.

Йәнә шундай бер риүәйәт бар. Әбйәлил ишанға Ҡаҙандан бер приказчик килә. "Тауар һатҡан аҡсамды урлаттым. Хәҙер бай мине төрмәгә ултырта инде. Олатай, ярҙам ит, һине илаһи ҡөҙрәт эйәһе тип әйтәләр бит",-ти. Хәҙрәт был кешенең хәйлә менән йөрөүен белә. Хәйләгә - хәйлә, бутҡаға - һары май һымаҡ булыр, ти ҙә, тегенең үҙен төп башына ултыртырға була. Ҡаҙан ҡунағын Мәндем буйына алып төшә лә: "Ошо ташты ҡалҡыт та үҙеңә етерлек кенә итеп алтын ал", - ти. Тегеһе ташты ҡалҡытып ебәрһә, соҡор эсе туптулы һары алтын,ти. Күҙҙәре шарҙай булған Ҡаҙан приказчигы ҡомһоҙланып алтынды түбәтәйенә, билен быуып алып, эсенә тултыра башлай. Ишан көлөмһөрәп ҡарап тора. Приказчик, алтынымды хәҙрәт кире тартып алып ҡуймаһын, тигәндәй, Ҡаранйылғалағы туғандарына ла барып тормай, шул көндө үк ашығып ҡайтырға сыға. Бер нисә саҡрымдай үткәс, шатлығына сыҙай алмаған юлсы тоғон сисеп ҡарай. Алтын урынына суйыр таштар күреп, саҡ ҡолап китмәй. Хәйләкәр ҡомһоҙ әҙәмде ишан шулай аҡылға ултырта.

Бөгөнгө көндә әүлиә ҡәберен халыҡ бик ҡәҙерләп һаҡлай. Өфө дәүләт сәнғәт академияһында проректор булып эшләгән ауылдашыбыҙ Фәйзуллин Азат Фәйзулла улы Әбйәлил ишандың ҡәберен биҙәкле рәшәткә менән кәртәләтеп алды. Уға әүлиә рухы сауабын ебәрер, иншалла.

**Лира ЯҠШЫБАЕВА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Аҡса һәм мөхәббәт етешмәгән көндәлек мәшәҡәттән ҡотолоғоҙ

Ҡанбаба-друид Конедда тарафынан әйтелгән был һүҙҙәр. Друидтар - кельттарҙың, бретонецтарҙың, шотландтарҙың тау халҡын, ирландтарҙы, валлийҙарҙы, корнуолдарҙы үҙенә берләштергән халыҡ төркөмөнөң ҡанбабалары була. Улар көс һәм тәбиғәт уңдырышлылығын символлаштырған имәнгә табына. Улар үткәндәрҙең һөҙөмтәле һәйкәлдәренең береһе булған Стоунхенджды төҙөүгә өлөш индерә. Англияның көньяғында Солсберий тигеҙлегендә урынлашҡан был һәйкәл, сығып килгән ҡояшҡа һәйкәл була, ҡояш тотолоу һәм башҡа астрологик күҙәтеүҙәрҙе әйтеүсе ҡорал булып тора.

Кельттар башҡа таш түңәрәктәр, бағаналар, мегалитик ҡоролмалар, шул иҫәптән дольмендар ҡора. Улар үҙҙәрендә бик күп булған байлыҡты, бигерәк тә аҡыл байлығын, һаҡлау өсөн тәғәйенләнә.

Беҙҙең буталған заманда ата-олатайҙарҙың ижадына хас булған бер сифат бөтөнләй юғалған. Һүҙ байлыҡ хаҡында бара. Күптән түгел быуаттар дауамында ер аҫтында ҡалған ҡала табыла. Унда был сифат уйламағанса килеп сыға. Ҡалаларҙың береһе Иорданияла урынлашҡан; бөгөн ул тар тарлауыҡтарҙың таштары аҫтында ҡалған, әммә ул замандағы Европаның үҫешкән мәҙәниәтенә хас булған архитектура стиле образын һаҡлаған. Ул үҙенең ҡаяға соҡоп яһалған, әммә ваҡыт һынауына бирешмәгән һүрәттәр менән биҙәлгән ҙур залдары һәм бүлмәләре менән һоҡландыра.

Икенсе боронғо ҡала Перуҙың ҡуйы урмандарында, Кусконан илле миль самаһы төньяҡкөнбайышҡа табан табылған. Ул Андтың лианалары, ағастары аҫтына күмелгән булған. Был ҡала Мачу-Пикчу тип аталған һәм ваҡытында бөйөк баш ҡала һәм ныҡлы ҡәлғә булып торған. Бөгөн бындай цитаделде төҙөү өсөн цивилизациялы донъяның барлыҡ байлыҡтары китер ине.

Был ҡалаларҙың береһе лә друидтар тарафынан төҙөлмәгән, әммә улар беҙгә мираҫ итеп ҡалдырған байлыҡ беҙҙән йәшеренеп ятырға мөмкин икәнлеккә бер миҫал.

Друидтар имәнгә уның көсө һәм сәтләүектәре күп булыуы өсөн генә түгел, ә ул тормош мәғәнәһен аңлатҡан өсөн табынған. Тормош - сикһеҙ сынйыр. Әгәр имәнде ҡырҡһаң, ул сәтләүектәренән үҫеп сыҡҡан бихисап имәндә йәшәйәсәк. Имән ағасы бер ваҡытта ла тыуымаған, шуға күрә, бер ҡасан да үлмәйәсәк. Быны Кешелеккә ҡарата ла әйтергә була. Тормош - сикһеҙ тәжрибә сынйыры, уның башы ла, аҙағы ла юҡ. Тимәк, уға тәбиғи сикләүҙәр юҡ.

Әммә тәбиғи булмаған сикләүҙәр бар. Улар сикһеҙ Ғаләм аңы өсөн тәбиғи түгел, әммә кеше аңы өсөн тәбиғи. Беҙ тәбиғи булмаған сикләүҙәрҙән ғазапланабыҙ. Улар беҙҙең уйҙарыбыҙ менән тыуҙырылған. Әгәр беҙ нимәнелер сикле итеп күрһәк, ул беҙҙең тормошобоҙҙа ла сикле буласаҡ.

Бер кем дә, тормошта беҙ мөхәббәттә һәм аҡсала сикле, тиеүем менән бәхәсләшмәҫ. Әммә был улай түгел. Кеше эйә була алған аҡса средстволары бер нисек тә сикләнмәгән. Әммә Гэйтс, Форбс, Перо йәки Рокфеллер фамилияһын йөрөтмәгән өсөн генә түгел, кешеләр сикле килем һәм байлыҡ донъяһында йәшәйбеҙ, тип уйлаған өсөн.

Кеше ҡабул итеп алырлыҡ һөйөү ҙә сикләнмәгән. Әммә көҙгөгә ҡарап һәм унда Мэрилин Монроны, Грета Гарбоны, Грегори Пекты, Гэри Куперҙы күрмәгәс, кешеләр сикле ылыҡтырыу донъяһында, тимәк, сикле һөйөү донъяһында йәшәйбеҙ, тип уйлай.

Аҡса йәки һөйөү етмәүҙән ғазапланыу бер нәмәгә лә нигеҙләнмәгән. Ул бары тик һеҙҙең уйығыҙ тарафынан тыуҙырылған. Уйҙарығыҙҙы үҙгәртегеҙ - тормошоғоҙ ҙа үҙгәрәсәк. Быға друидтарҙың серен ҡулланып та өлгәшергә була.

**Роберт СТОУН.**

✓ *Ә белорустар, нигеҙҙә, бер нәмәгә лә үпкәләмәй, сөнки улар тураһында үпкәләрлек стереотип юҡ. Яртыһы - элекке партизан, икенсе яртыһы "Беларусь" тракторында йөрөй. Был бит кәмһетмәй.*



*ГӘЗИТТӘН КҮСЕРЕП...*

# "ҺИН ҮҘЕҢ ХОХОЛ!"

## Ни өсөн милләт-ара стереотиптар хәтерҙе ҡалдыра?

**Украина телеканалдарының береһендә Бойондороҡһоҙлоҡ көнөнә шаян социаль реклама ҡуйлар. Унда Украина гимнын төрлө милли аҙсылыҡ: поляктар, рустар, әрмәндәр, сиғандар һ.б. милләт вәкилдәре башҡара. Белорустар нисек итеп картуфтан компот ҡайнатыу буйынса фекер алыша, венгрҙар йыуынған ҡыҙҙарҙы күҙәтә... Тик бына Рәсәй тураһындағы юмор ғына ҡара төҫтә: сәсе ҡойолоп бөткән, тельняшкалы бабай урамда йоҡлап ята (эскәнме икән?), тулы битле егет баяны урталай өҙә (иҫерек килешме?)... Севастополдәге рус общинаһы был рекламаға ҡарата ризаһыҙлыҡ белдерә, уларға әрмәндәр ҙә ҡушыла, сөнки уларҙың ҡәрҙәштәре роликта ярлы итексе итеп күрһәтелә.**

**Ни өсөн беҙ кемдер милли образдарҙы боҙоп һүрәтләгәндә генә шул тиклем тұҙынабыҙ?**

"Эскелек, ялҡаулыҡ, һәпрәлек - рустар өсөн иң ауыр ҡабул ителгән стереотиптарҙың береһе, - ти Киев университетының тарих кафедраһы уҡытыусыһы Ирина Омельчук. - Хатта роликта балалайка тотҡан айыу ҙа ул тиклем үпкәләтмәҫ ине уларҙы. Быймалар, ҡолаҡсын бүрек, билмән, ҡыҙыл ыуылдырыҡ - Рәсәйҙе һынландырған әллә күпме нәмә һанап булыр ине. Нинә тик негативты алабыҙ һуң? Украина менән Рәсәй араһындағы үҙ-ара шаярыу ауыр ҡабул ителә, сөнки бер ҡыйыҡ аҫтында йәшәгән ир менән ҡатындың айырылышып, бер-береһен хурлағанын хәтерләтә ул... Украиндар үҙҙәрен "хохол", хатта "бандеровсылар" тип әйткәнгә ҡарағанда, "рәсәйҙәрҙең кесе туғаны" тигәнде күрә алмай - бында ғаиләләге кәмһетеү комплекслылығы бар. "Үпкәләү статьяһы"ның икенсеһе, йәнәһе, украиндар һәр кемдә һыйларға тейешле сусҡа майы. Статистика күрһәтеүенсә, илдәге халыҡтың 60 проценты сусҡа майын күрә алмай. Ҡомһоҙлоҡ, хәйләкәрлек - украин халҡына йәбештерелгән ике мөһөр рустарҙы эскелек һәм һәпрәлек кеүек үк үпкәләтерлек һыҙаттар. Бына шулай, ни өсөндәр "сит ил милләттәрен", мәҫәлән, француздарҙы - һәйбәт һөйәрҙәр һәм ашнаҡсылар, итальяндарҙы - яҡшы йырсылар һәм футболсылар, тип, ыңғай сифаттар менән күҙ алдына килтерһәк, элекке СССР халыҡтары тураһындағы күҙаллауҙар гел кире һөҙөмтә бирә лә ҡуя".

### Ҡомһоҙҙар? Аңралар?

"Грузиндар тураһында һөйләгәндә, беҙҙең мөхәббәтле булыуыбыҙҙы йәки шарап яратыуыбыҙҙы иҫкә алалар һәм минә ҡыйын түгел, бындай стереотиптар менән ғорурланырға була, - ти Тбилисиҙан табиб-хирург Георг Натадзе. - Барлыҡ грузиндарҙы ла аэродромкепкаларҙа ҡәнәферҙәр йәки апельсиндар һатып тороусы тип һүрәтләүҙәре ҡыйын. Йәнәһе, беҙҙең балаларыбыҙ вузға бары тик "Волга" йәки һарыҡ биреп кенә инә, ҡатын-ҡыҙҙар йорт хайуандары хоҡуғында ғына йәшәй, тиеүҙәре йәнде көйҙөрә. Грузия, тигәндә йырҙарыбыҙ, бейеүҙәребеҙ, ҡунаҡсыллығыбыҙ һәм телде йоторлоҡ ризыҡтарыбыҙ, бигерәк тә хәҙер, Саакашвилиҙың кире образы арҡаһында, һирәк иҫкә алына".

Әрмәндәр өсөн - ғорур һәм зыялы милләткә - "алдашырға яратыу"ҙа ғәйепләү иң насары. Әгәр рустар үҙҙәренең араҡыға булған мөхәббәтенән оялһа, әрмәндәр коньякка булған һөйөүе менән ғорурлана ғына.

Телевизор, бигерәк тә "Наша Раша" тапшырыуы аша тажиктар аңрараҡ булып күҙ алдына баҫа. Гастарбайтерҙар Равшан менән Джамшуд бесәйҙән аш бешерә, телевизор экранына һүрәт яһай, тәҙрәләргә обойҙар йәбештерә. Бер нисә тажик Интернетта тажиктарҙың образын аҡлау буйынса тотош кампания ойоштора һәм был программаны ябырға саҡыра. "Равшан менән Джамшудтың аҙыҡты унитазда әҙерләүе "харам" тигән төшөнсәне күҙҙә тотҡан тажик-мосолмандарҙы рәнйетә, - тип яҙа улар. Программа авторҙары гастарбайтерҙар образы - йыйылма тип аңлатһа ла, "Наша Раша"ла "Мәскәү" тажик теленән тәржемә иткәндә "резина ҡала" тигәнде аңлата" тигәнерәк шаярыуҙар ҙа ишетелә һәм тажик йәмәғәтселегенең ризаһыҙлығы тағы ла арта төшә.

Тажиктарға тиклем аңралыҡ эталоны булып чукчалар тора ине. Ғәмәлдә иһә, чукчалар башҡаларға ҡарағанда аңрараҡ түгел, бары тик улар ябайыраҡ. Мәҫәлән, исем, атай исеме һәм фамилия урынына уларҙа исем генә (Рәсәй паспорты өсөн ҡалғандарын өҫтәп яҙалар).

### Танауы ҙур бит...

Йәһүдтәргә башҡаларға ҡарағанда ярлыҡтар күберәк эләгәләр, моғайын. "Комһоҙҙар, хәйләкәрҙәр, башҡаларҙы күрә алмайҙар"... Ҙур танаулылар. Һәр ваҡыт тултырылған балыҡ ашайҙар, ә тәнәфестә барыһын да алдайҙар... Әммә йәһүдтәрҙең үпкәләргә ваҡыты юҡ -эшләйҙәр. Сөнки улар " иң аҡыллылар һәм иң уңышлылар" ҙа бит. Ә был стереотип көнкүрештә бик иҫкә алынып бармай.

Сиғандар үҙҙәрен бур һәм теләнсе тип иҫәпләгәнгә үпкәләй, Балтика буйы илдәре халҡы - "тормоз" тигәнгә, белорустар... Ә белорустар, нигеҙҙә, бер нәмәгә лә үпкәләмәй, сөнки улар тураһында үпкәләрлек стереотип юҡ. Бөтөн нәмәне бүлбенән әҙерләйҙәр, шунан ни булған? Яртыһы - элекке партизан, икенсе яртыһы "Беларусь" тракторында йөрөй. Был бит кәмһетмәй. "Ғөмүмән, - тип һығымта яһай Ирина Омельчук, - беҙгә күршеләрҙең образын яҡшыраҡ, ыңғайыраҡ итеп формалаштырырға кәрәк. Сөнки элекке СССР кешеһе сикте сығыу менән уға икенсе, үткәндә "туғандаш" булған милләттең ярлығын тағалар бит.

**Ольга КОСТЕНКО.**

**"Аргументы и факты" гәзитенән.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**1 октябрҙә** сәнғәт ветерандарының **"Еҙ ҡыңғырау моңдарында үткәндең һағыштары..."** исемле ҙур концерты үтә. Концертта Ф.Ҡудашева, Р.Йәнбәков, Р.Туйсина, Ә.Урәзмәтов (Кәтүк), М.Ғәлиева, М.Иҙрисов кеүек мәшһүр сәнғәт оҫталары, шулай уҡ Ф.Килдейәрова, Р.Вәғизов, Ф.Сиражетдинова, А.Смакова, Т.Үҙәнбаева, Л.Гәрәева, Ә.Яхина, М.Ғәйнетдинов, Р.Вәдүтов, А.Айыткәолов, З.Ҡудашева, Г.Мамина, шулай уҡ башҡа йырсылар, һүҙ оҫталары, музыканттар һәм бейеүселәр ҡатнаша. Концерт филармонияның Ҙур залында 19.00 сәғәттә башлана.

**Белешмәләр өсөн телефондар: 250-77-42.**

### М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**5 октябрҙә** коллектив тамашасыларға А.П.Чеховтың **"Туй"** шаян комедияһын тәҡдим итә. Спектаклдә сәхнәгә Санкт-Петербург режиссеры Борис Цейтлин ҡуйған. Спектакль 19.00 сәғәттә башлана.

**Белешмәләр өсөн телефон: 272-39-30.**

### М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**23, 24 сентябрь** Башҡортостан Республикаһы Суверенитетына 20 йыл тулыуға арнап, Таңсулпан Ғарипованың режиссер Таңсулпан Бабичева сәхнәләштереүендәге **"Ғилмияза"** драмаһын тәҡдим итә.

**30 сентябрҙә** башҡорт труппаһы тамашасы иғтибарына В.Шекспирҙың **"Ромео һәм Джульетта"** трагедияһын тәҡдим итә. Спектаклдең режиссеры - Илнур Муллабаев. Спектаклдәр 19.00 сәғәттә башлана.

**Белешмәләр өсөн телефон: 272-13-52.**

### *КОТЛАЙБЫҘ!*

Сентябрь айында тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙҙы - **Әбйәлил районы** Аманғилде ауылынан Фәтхиә Рәхмәтованы, **Ейәнсура районы** Абҙан ауылынан Айгөл Ғәлиеваны, **Йәрмәкәй районы** Йәрмәкәй ауылынан Гүзәл Әхмәҙиеваны, Рәтамаҡ ауылынан Гөлсөм Вәлиәхмәтованы, **Бәләбәй ҡалаһынан** З.Әхмәрованы, **Мәсетле районы** Оло Ыҡтамаҡ ауылынан Эдуард Бәзретдиновты, **Бөрйән районы** Иҫке Собханғол ауылынан Рәмилә Юлсуринаны, **Салауат ҡалаһынан** Таңһылыу Ишсариналы, **Мәләүез ҡалаһынан** Нәзифә Ильясованы, **Сибай ҡалаһынан** Илүзә Хәсәновaны, **Чесноковка ҡасабаһынан** Әлфиә Ғәбәйҙуллинаны, **Ейәнсура районы** Малай Муйнаҡ ауылынан Гөлназ Аҡбашеваны, **Стәрлетамаҡ ҡалаһынан** Рәйсә Илишеваны, **Күгәрсен районы** Нарбут ауылынан Фыуат Зәйнәғәтдиновты, **Федоровка районы** Сәйет ауылынан Сөмбөл Мәүлитованы, **Ауырғазы районы** Иҫке Әбсәләм ауылынан Кәримә Рәхимованы, **Учалы ҡалаһынан** Алһыу Ғарифуллинаны ихлас күңелдән ҡайнар ҡотлайбыҙ!

Алдағы тормошоғоҙҙа көндәрегеҙҙең тыныс, эштәрегеҙҙең уңышлы, юлдарығыҙҙың уң, сәләмәтлегегеҙҙең яҡшы, күңелегеҙҙең тыныс булыуын теләйбеҙ!

**Иң изге теләктәр менән "Киске Өфө"ләр!**

*ИҒЛАН*

Халыҡ-ара кимәлдәге **(Cambridge, ICELT)** тәжрибәле уҡытыусы, РФ дөйөм белем биреү алдынғыһы, инглиз теле уҡытыусыларының Рәсәй-Америка конкурсы **(TEA, 2001)** еңеүсеһе **инглиз телен** өйрәнергә теләүселәрҙән төркөм (6-9 кеше) йыя. Дәрестәр автор программалары буйынса үткәрелә.

**Тел.: 8-917-43-47-270, 256-98-04.**

**ЗАБОРЫ ИЗ ПРОФНАСТИЛА И СЕТКИ-РАБИЦЫ**
• КАЧЕСТВО • ГАРАНТИЯ • НЕДОРОГО •
тел.: 8-962-524-57-54

*ҺҮҘ АРАҺЫНДА...*

## ҺАНДАР ҺӘМ ЙЫЛДАР ТУРАҺЫНДА

■ Әгәр 111,111,111 һанын үҙенә үк ҡабатлаһаң, яуапта шундай ҡыҙыҡ һан килеп сыға: 12 345 678 987 654 321 (бөтә һандар ҙа башта үҫә, ә һуңынан кәмей).

■ Тиҫкәре һан төшөнсәһен иң беренсе итальян сауҙагәре Пизано 1202 йылда индергән, уның менән ул үҙенең бурыстарын аңлатҡан

■ Гугол һаны - ул бер һәм уның артынан йөҙ нуль. Һанға исемде америка математигы Эдвард Каснер биргән. Тағы ла гуголплекс һаны бар - бер һәм унын артынан гугол нуль.

■ Йыш ҡына "рәшәткә", "номер билдәһе" тип йөрөтөлгән # символының ысынында рәсми исеме бар - октоторп.

■ 21978-ҙе дүрткә ҡабатлағанда яуап ул һандың кире тәртибендә килеп сыға: 21978 х 4 = 87912.

■ 1961 йыл - яҙылышы ҡәҙимге рәүештә лә, әйләндерелгән рәүештә лә бер үк уҡылған яңыраҡ булып уҙған йыл. Киләһе шундай йыл 6009 йыл буласаҡ!

*ҠОЛАҠ ҺАЛ!*

## ЙОҠОҢ ИҪӘБЕНӘ ИНМӘ

Күптәр эшләү, уныш яулау өсөн тәүлектәге ваҡыт күберәк булһын, тип ҡиммәтле йоҡо ваҡытын һанға һуҡмай. Йыш ҡына йоҡоно һуңынан туйҙырырбыҙ әле, тип, йоҡо ваҡытын ике тапҡырға тиклем дә ҡыҫҡартыусылар осрай. Йәнәһе, ял көндәре, байрамдар, отпуск ваҡыты алда әле...

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, йоҡонд ҡыҫҡартыуындан һис тә яҡшы булып китмәйәсәк һәм әгәр һеҙҙең организмығыҙ тулыһынса ял итмәһә, көндөҙ эшкә һәләтлелек кәмейәсәк, ә был бер көндә мөмкин булған эштәр әҙерәк эшләнде, тигәнде аңлата. Шуға күрә һәр кем организмын тыңлап өйрәнергә тейеш.

Үҙенә ҡағиҙә итеп ал: һәр кем өсөн 7 сәғәт йоҡо мотлаҡ кәрәк. Йоҡо менән шаярма, тулыһынса ял итеп, һин бер көн эсендә күберәк уңышҡа өлгәшә алаһың.

АФАРИН!

# БЕҘҘЕҢ РЕЖИССЕР ҺӘМ...

## Мәскәү артистары

**Режиссер Салауат Вахитов "Ирекһеҙҙән батыр" исемле яңы кинопроект өҫтөндә эш башланы. Автор белдереүенсә, фильм-трилогия башҡорт кинематографияһы өсөн уйланылған булһа ла, "Башҡортостан" киностудияһы фильмды ҡуйыуҙан баш тартҡан.**

Режиссерҙың эше менән Мәскәү кино эшмәкәрҙәре ҡыҙыҡһыныу белдергән.Фильмдың сценарийы айырыуса Петр Мамоновка, Виктор Сухоруковка һәм Юрий Кузнецовка оҡшай. Петр Мамонов Салауат Вахитов менән бергә эшләргә теләүе һәм хатта көслө актер составы йыйырға әрҙәм итәсәге хаҡында белдерә. Фильмда шулай уҡ Башҡортостан артистарының да ҡатнашыуы мөмкин.

"Ирекһеҙҙән батыр" бөгөнгө кешенең әҙләнеүҙәре, уның проблемалары, рухи мәсьәлә хаҡындағы фильм. Ләкин фильмда был ҡатмарлы тема еңел, сюрреалистик фарс аша яҡтыртыла. Геройҙар фильмда дүртәү: Василий, Фараон, ФСБ Генералы һәм Афғанды үткән майор.Улар ниндәйҙер һайлау алдында ҡалғанда ғына үҙ асылдарын асыуға өлгәшәләр. Фильмдың исеме лә ошонан алынған.

Сценарий яҙыусы-сатирик Евгений Мальгинов һәм Анна Мальгина менән берлектә эшләнгән. Беренсе картинала сусҡа көтөүсеһенең нисек итеп шәхси дауахананың баш табибы булып китеүе күрһәтелә. Икенсе, эш исеме "Человек-баллист" булған серияла ваҡиғалар ФСБ Генералы әргәһендә бара. Трилогияның өсөнсө фильмы "Курочка ряба"исеме аҫтында әлегә эшләнеп бөтөү өҫтөндә.

**Әлфиә ӘҺЛИУЛЛИНА.**
**"Башинформ".**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# ҺАЛМАҺЫ...

## әтер-мөтөрлө

Әсәйем, ҡарт өләсәй менән өләсәйемдән, ике инәйемдән һөйләшеүенә ҡолаҡ һалһаң, ғәжәп ҡыҙыҡ һүҙҙәр ишетергә мөмкин ине. Һүҙ уйнатып, әйтеммәкәлгә оҡшатып әйтелгәндәре лә бар ине. Мәҫәлән, **"Әгеҙ-өгөҙ, бер мөгөҙ"** - эште арлы-бирле генә эшләүҙе аңлата.

**"Әтер-мөтөр"** тигәне төйөрҙө аңлатыр. "Әтер-мөтөр һалма бешергән килен" тип ҡайтып һөйләһәләр, кемдеңдер һалмаһы төйөрлө булып ойошҡан. "Һалма"ны ҡайһы яҡта **"туҡмас"** тип йөрөтәләр. Әбйәлилдә итһеҙ, һыуҙа ғына бешкән ашты ла һалма тиҙәр. Мамыҡ шәлдәге дүрткел биҙәктәрҙе **"һалма биҙәк"** тип атайҙар. Әммә был яҡтарҙа һалманы дүрткелләп түгел, оҙонсалап ҡырҡалар. Борон ҡоторған эт тешләгәндә өйҙән-өйгә йөрөп йыйылған ашты ашап дауаланғандар. Уны **"ҡырҡ һалма"** тип йөрөтәләр. Йәнәһе, ҡырҡ өйҙән йыйылған аҙыҡ.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!

### Яңы картуфтан турама

600 гр яңы картуф, 1 ҡалаҡ аҡ май, ярты стакан ҡаймаҡ, 2-3 ҡалаҡ туралған әнис, гәрсис, тоҙ алына.

Ваҡ ҡына яңы картуфты таҙартҡас, тоҙло һыуҙа бешереп алырға. Уға май, ҡаймаҡ, әнис, тоҙ, гәрсис ҡушып болғатҡас, һауыттың ҡапҡасын ябып, бер аҙ тотоп алырға. Табынға ит менән бергә ултырһаң да була.

### Әнисле балыҡ бәлеше

Әсе ҡамырҙы ике өлөшкә бүлеп, бер өлөшөн йәйеп майлы табаға һалырға. Ҡамырға туралған бешкән балыҡ ите, ҡыҙҙырылған һуған, ваҡ ҡына итеп туралған әнисте һалырға ла, икенсе өлөш менән ябып, ситтәрен йәбештерергә. Бәлештең өҫтөнә йомортҡа һөртөп, духовкала бешереп алырға.

### Аҡ соус

25 гр аҡ майҙы иреткәс, 25 гр ондо һалып болғатырға һәм әҙләп кенә ҡайнар һөт өҫтәп шыйыҡлатырға (ҡаймаҡ консистенцияһына инергә тейеш). Уға йомортҡа һарыһы, гәрсис, тоҙ, лимон һуты, шәкәр ҡомо өҫтәргә. Һыуыған соусҡа ҡаймаҡ һалып, болғатырға.

### Емеш ләүәше

Әсе ҡамырҙы тигеҙ итеп табаға йәйергә һәм ҡабарғанын көтөргә. Өҫтөнә киптерелгән икмәк валсығы һибергә һәм һыуҙа сайҡатып алынған еләктәрҙе теҙеп сығырға. Еләктәрҙең өҫтөнә 2 ҡалаҡ шәкәр ҡомона ярты стакан он, 40 гр аҡ май ҡушып, ҡул менән ыуылған онтаҡты һиберергә. Духовкала 15-20 минут бешереп алырға.

**Алһыу ҒӘЗИЗОВА.**

АТЫҢ КЕМ?

# ОЛО ОЛАТАҺЫНЫҢ ИСЕМЕН ЙӨРӨТӘ

Һүрәттә һеҙ күргән был малай Бөрйән районы Ҡолғана ауылынан Ғәҙелша Яҡупов булыр. Быйыл II класта тырышып белем ала, уҡыған кеше - ҙур кеше булырын яҡшы аңлай. Бигерәк тә туған тел дәресен ярата, ә дәрестәрен ваҡытында эшләп ҡуя, аҙаҡҡа ҡалдырырға яратмай. Малайҙарына ни өсөн был исемде һайлауы тураһында Ғәҙелшаның атаһы Рауил ағай һөйләп үтте: "Малайыбыҙ тыуғас та ниндәй исем һайларға, тип аптырап торманыҡ, сөнки нәҫелебеҙҙә яҡшы кешеләр күп булған, шуға күрә башта уҡ нәҫел кешеһенең исемен һайларбыҙ, тип һөйләшеп ҡуйғайныҡ. Мин башта әсәйем яғынан олатайымдың исемен - Ғәлимйән, тип ҡушырға уйлағайным. Ҡатыным: "Атай яғынан булған исемде ҡушһаң, яҡшыраҡ та, дөрөҫөрәк тә була", - тип, Ғәҙелша олатайымдың исемен ҡушырға тәҡдим итте. Шулай итеп, Ғәҙелша улыбыҙ Мөхәмәтша олатаһының атаһының исемен йөрөтә. Минеңсә, нәҫел быуынындағы исемдәр иҫтә ҡалырға, улары йәш быуын белергә тейеш. Шуға күрә йөштәр балаларына әлләкайҙан ят исемдәр һайлап аптырманһын, эҙләнмәһен, ә үҙ шәжәрәһенә байҡау ғына яһаһын. Беҙҙең олатай-өләсәйҙәрҙең исемен дә матур, яғымлы, мәғәнәле исемдәр юҡ. Шулай итһәк, беҙ боронғо башҡорт исемдәрен тергезеүгә лә ҙур көс индерербеҙ".



**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# "УФ" ТИМӘ...

## эсеңдә ут булһа ла

Кеше өсөн иң ҙур һынау - уңышһыҙлыҡҡа ҡаршы тороу түгел, ә бәхеткә ҡаршы тороу.

**(Франческо Гвиччардини).**

Иркәләүҙе эшкә еккән ҡатын-ҡыҙҙан да ҡурҡынысырағы юҡ.

**(Стоби).**

Тауышланып ҡына бер ни ҙә иҫбатлап булмай. Ҡарағыҙ: йомортҡа һалған тауыҡ бөтөн Ер шарын барлыҡҡа килтергән кеүек тауышлана.

**(Марк Твен).**

Фәҡирлек кешене шул тиклем кәмһетә, улар хатта үҙҙәренә изгелек ҡылыусыларҙан да ояла.

**(Маркиз де Вовенарг).**

Байлығы күп булғандар бай түгел, байлыҡты бирә белгәндәр бай.

**(Эрих Фромм).**

Кеше үҙ-үҙенә ярҙам итмәй тороп, башҡаларға ярҙам итә алмай.

**(Уильям Шекспир).**

Эсең тулы ут булһа ла кеше алдында "уф" тимә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Күп ирҙәр ҡатынынан үҙе лайыҡ булмағанды талап итә.

**(Лев Толстой).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ике будда монахы бер сәфәрҙә йөрөп, монастырҙарына ҡайтып бара, ти. Тағы өс көнлөк юл ҡалғанда, юлдарын көслө ағымлы тау йылғаһы бүлгән. Монахтар яр буйында йылға аша сығырға ҡыймай, аптырап ултырған ҡатын-ҡыҙҙы ла күрәләр. Монастырь ҡағиҙәһе буйынса, монах ҡатын-ҡыҙға ҡағылырға тейеш булмай. Әммә был монахтар ҡатынға ярҙам итмәй үҙып та китә алмай. Шуға ла монахтарҙың береһе уны елкәһенә йөкмәп, тегеяҡ ярға сығарып ҡуя. Шунан улар бер ни ҙә өндәшмәй-нитмәй, юлын дауам итә.**

**Бына өс көндән һуң монастырҙың манараларын күрәнә. Монахтарҙың икенсеһе тәүгеһенә былай ти:**

**- Һин беҙҙең Уҡытыусыға елкәңдә биш минут буйы ҡатын-ҡыҙҙы йөкмәп барыуың тураһында әйтәһеңме?**

**- Мин ул ҡатын-ҡыҙҙы биш минут буйы елкәмдә йөкмәп алып сыҡтым һәм шул йылға буйында ҡалдырҙым, ә һин уны өс көн буйы һаман йөкмәп киләһең икән... - тип яуап биргән беренсе монах".**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

Мөхәррирәт: Әхмәр ҮТӘБАЙ, Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Таһир ИШКИНИН, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тираҙы - 6035
Заказ 3719